*✓ Таныштарығыҙ, хеҙмәттәштәрегеҙ араһында "Киске Өфө"гә яҙыла алмай ҡалғандар булһа, иҫтәренә төшөрөгөҙ: улар гәзитебеҙгә әле лә яҙыла ала, тик уны марттан ғына алдыра башлаясаҡ. Шулай уҡ февраль-мартта 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе яртыһына ла яҙыла башларға мөмкин. Беҙҙең индекстар: 50665 (алты айға - 330 һум 24 тин), 50673 - (предприятие һәм ойошмалар өсөн 360 һум 24 тин).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 ҒИНУАР - 4 ФЕВРАЛЬ (ҺЫУЫҒАЙ - ШАҠАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№5 (423)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Урал батыр" календары



6-7

Беҙҙә димләп өйләндерҙеләр...

Димләп өйләндерергә кәрәк йәштәрҙе



8-9

Башы лыҡа тулы хазина ине



10-11

Вампирҙар әкиәттә генәме?



13

14 ТВ-программа

ҮӘТ АЛДАЙҘАР!

# НӘФСЕНДЕ АҘҘЫРМАҺАҢ...

## отолмаҫһың бер кемдән



**Кемгә нисек, ә минең өсөн "Нәфсеңде аҙҙырма!" тигән һүҙҙәрҙә оло мәғәнә ята. Яңы йылда Мавроди исеме менән бергә МММ һәм финанс пирамидаһы төшөнсәләре, бүренән ҡасҡан ҡуян тиҙлеге менән, яңынан тормошобоҙға килеп керҙе. Һәм кешеләргә ҡомарлы уйында ҡәтғи рәүештә ҡатнашмаҫҡа өндәп, МММ уйынының яңы төрө иғлан ителде.**

Йәшермәйем, мин дә уйындың 22 ғинуарҙа баҫтырылған өлгө-тәртибен уҡып сыҡтым. Хатта үҙем өсөн, әгәр ҡатнашһам, отмаһам да, отолмаҫлыҡ уйын стратегияһын төҫмөрләп ҡуя һалдым. Эйе, нәфсе һәр кем күңелендә ултыра шул. Ә ҡомарлы уйындар кешенең шул йомшаҡ яғын иҫәптә тотоп ойошторола ла инде. Быға тиклем нәфсемде тыйып килдем, ниндәйҙер уйынға үҙемде йәлеп итеүгә ҡаршы тора алдым. Бик абруйлы ағайҙар "ышаныслы инвестиция проекттарына" ҡушылырға тәҡдим итеп ҡаранылар, ауылдаш апайҙар: "Һин финанс-иҡтисад институтын тамамлағанһың, бындай уйындарҙың отошло икәнен яҡшы беләһең", - тип өгөтләнеләр. Ә мин: "Юғары отош юғары отолош менән йәнәш йөрөй", "Буштан килгән - бушҡа китә, үҙе менән өс өлөш хәләлеңде ала", "Нәфсене бер ҡулдан ысҡындырһаң, кире ауыҙлыҡлауы бик ауыр", - тип, тәҡдимдәрҙе кире ҡаға барҙым. Артабан да шулай булһын.

Үҙәк телевидение каналдарында аҡса түләнмәйенсә бер генә тапшырыу ҙа эфирға сыҡмай, тиҙәр. Биш көн эсендә төп өс федераль каналда - Вести (16 ғинуар), 1ТВ (18 ғинуар), НТВ (21 ғинуар) каналдарында МММ тураһында барған берәр сәғәтлек тапшырыуҙарҙың хаҡын кем түләне икән? Ни өсөн сәйәсмәндәр, финанс белгестәре, дәүләт хеҙмәткәрҙәре, хатта Мавроди үҙе лә, кешеләрҙе МММ проектында ҡатнашмаҫҡа өндәй? МММ һымаҡ ҡомарлы уйындарҙа кем отола һәм кем ота? ВЦИОМ етәксеһе Валерий Федоров әйтеүенсә, рәсәйлеләрҙең 15 проценты яңы уйынға ҡушылырға әҙерлеген белдергән дә инде. Тимәк, ойоҡтарҙа, китап араларында ятҡан аҡсалар хәрәкәткә киләсәк. Ә кемдер үлемтеккә һаҡлағанын йәки ауыҙынан өҙөп йыйған һуңғы һумдарын уйынға тығасаҡ. Уйындың тәҡдим ителгән тәртибе буйынса, банк системаһы аша финанс әйләнешенә индерелгән аҡса күләме йөҙәрләгән миллиард һумдар менән иҫәпләнеүе ихтимал. Был насармы, әллә яҡшымы? Кем өсөн һәм нисек? Аҡса әйләнешенән килгән килем ысын байлыҡмы, әллә буш ҡыуыҡмы? Матди байлыҡ менән рухи байлыҡтың айырмаһын аңлатыр өсөн йәмғиәткә ебәрелгән тағы бер һынау түгелме? Яңы МММ уйынында күпме милләттәштәрем үҙ "бәхетен" һынар? Улар финанс пирамидалары, селтәрле маркетинг проекттарында уңышҡа өлгәшеү йәһәтенән ҡулланылған стратегия төрҙәрен беләме? Үҙ фекеремдә, тәжрибәмде һөйләһәм, улар мине нисек аңлар һәм ниндәй ҡарар ҡабул итер? Ғөмүмән алғанда, МММ тураһында һүҙ ҡуйыртыу урынлымы?

Ошолар хаҡында уйлап-уйланып йөрөгәндән һуң, милләттәштәремә ябай ғына итеп: "Аҡыл менән генә ҡарар ҡабул ит, нәфсеңде аҙҙырма, ата-бабаларҙан килгән тәртипте һаҡла, динебеҙ өнәмәгән ҡомарлы уйындарҙан йыраҡ тор", - тип кәңәш итер инем. Ә үрҙә яҙылған һәм яҙылмаған һорауҙарға һәр кем үҙ аллы яуап табырына ышанам. Башҡорттарҙың мейеһе, Мавродиныҡы һымаҡ, 12 тапҡыр урынынан күсмәгән һәм уныҡынан яҡшыраҡ эшләй. Иң мөһиме, тормошта йәшәүҙең мәғәнәһе аҡсала, байлыҡта түгел, ә киләсәк быуында, балаларҙа икәнен белә.

**Рөстәм НУРИЕВ,**
**иҡтисадсы.**

ИҒТИБАР!

# "КИСКЕ ӨФӨ" САЙТЫНА ҺӘМ БЛОГЫНА РӘХИМ ИТЕГЕҘ!

**Башҡорт телендәге аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенең интернетта үҙенең сайты бар икәнен беләһегеҙ инде: http://kiskeufa.ru/. Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән таныша, төрлө мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Ошо көндәрҙә баҫмабыҙҙың блогын да булдырҙыҡ, тип хәбәр итәбеҙ: http://blog.kiskeufa.ru/.**



Мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше? Мәғлүмәт алыу өсөн, тиерһегеҙ. Уның өсөн генә түгел. Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш. Икенсенән, уҡыусы теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн иң тәүҙә уның донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү. Уйланмай кеше. Күп мәсьәләләрҙең сиселеше, күп һорауҙарға яуап үҙендә, үҙенең күңелендә, аң төбөндә икәнен аңламай кеше.

Әйҙәгеҙ, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек, тип өндәшәбеҙ "Киске Өфө"гәзите блогына күҙ һалғандарға. Был блогта битараф булмағандарҙың, яҡты уйлы, яҡты күңелле кешеләрҙең яҙмаларын күрергә теләр инек.

Республиканан ситтә йәшәүселәр әлегә гәзитебеҙҙе алдырып уҡый алмай, улар беҙҙең сайт аша таныша ала баҫмабыҙ менән. Ә блогта үҙ фекерҙәрен ҡалдыра ала.

Блогта фекер алышыр тәүге һорауҙы шулай ҡорҙоҡ: "Бер аҡыллы кеше әйтмешләй:"Йәмғиәткә позитив энергияһын сығарырға булышлыҡ итергә кәрәк". Негативтан ҡотҡарыр позитив нисегерәк булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?"

**Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

*✓ Тәбиғәтте йәшәүебеҙ сығанағы итеп ҡарауҙы бала саҡтан аңға һеңдереү кәрәктер. Рәсәй халҡына ул өлкә ят күренеш. Ҡара тупраҡлы ер ҙә сүллеккә әйләнеүе бар.*



СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ҠУРҠЫТЫУМЫ, ӨГӨТЛӘҮМЕ?

## Юҡ, ғаилә тәрбиәһе!

**ҺОРАУ: Ни өсөн халыҡ ерҙәге хакимдарҙың язаһынан, хөкөмөнән, тәнҡитенән ҡурҡа? Күктәге Хакимдың хөкөмө ҡурҡынысыраҡ түгелме ни?**

**Фәнзил ӘХМӘТШИН:** Был донъла кеше өсөн иң ҙур яза - ул үлем. Кеше үлемдән ҡурҡып йәшәй. Ниндәй генә юлдар менән булһа ла ғүмерен һаҡлап ҡалырға тырыша. Бөгөнгө заманда халҡыбыҙ диндән шул тиклем алыҫлашҡан. Динде белмәү арҡаһында кеше теге йәки был ғәмәлдең ахыр сиктә үҙе өсөн нисек тамамланырын да аңлап еткермәй.

Ә теге донъяла бит һине мәңгелек яза көтөүе лә ихтимал. Мәҫәлән, суицид менән үлгән кеше теге донъяла ошо ҡылығын бер туҡтауһыҙ ҡабатлау язаһын күрә. Шуға күрә мосолман өсөн был донъялағы ваҡытлыса язаға ҡарағанда әхирәттә, мәңгелектә янаған мәңгелек яза ҡурҡынысыраҡ.

**Тәлғәт ХАФИЗОВ:** Билдәле булыуынса, закондар халыҡты "ауыҙлыҡлай" алмаған осраҡта, дәүләт төрлө алымдар ҡуллана: беҙҙең илдә ҡурҡытыу алымы элек-электән тәртип гаранты булып иҫәпләнгән. "Ҡурҡа икән - ихтирам итә" тигән әйтем дә юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Дәүләттең халыҡты ҡурҡытыуы арҡаһында пассив йә актив формалағы ҡаршылыҡҡа дусар булыуы тәбиғи күренеш. Йылдар, хатта быуаттар һуҙымында халыҡ күңелендә пассив формала йәшәгән ҡәнәғәтһеҙлек, үҫә килеп, актив формаға әүерелә. Тап ошо мәлдә тағы бер ысул - тоғролоҡҡа, сыҙамлылыҡҡа өндәүсе, был донъя михнәттәренең фани ғына булыуын төшөндөрөүсе дини тәғлимәттәр дәүләткә ярҙамға килә. Ләкин был тәғлимәттәр кеше күңеленә һеңешһен өсөн барыбер ҙә өсөнсө бер шарт кәрәк: ғаилә тәрбиәһе. Кеше өсөн ата-әсәһе биргән ҡиммәттәрҙән дә әһәмиәтлерәк тәрбиә сығанағы юҡ. Сөнки тап ғаиләлә һалынған ҡиммәттәр генә кешенең төп булмышын әүәләй. Шуға күрә, һәр кеше иң беренсе сиратта ғаилә ҡанундарына тоғро булырға тейеш. Ерҙәге хакимдарҙы ла, күктәге Хакимды ла хөрмәт итергә бары тик ошо тәрбиә генә өйрәтә ала, тип уйлайым.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ:** Кеше ғүмере - ул бары тик эстафетаның бер өлөшө генә. Йәғни, кеше был донъянан киткәс, йән һауытынан айырылғас, теге донъяға эләгә. Был донъялағы хаким кешенең "йән һауытын" селпәрәмә килтереп, теге донъяға оҙата икән, тәндән айырылған йән күктәге хаким ҡаршыһына барып баҫырға тейеш була. Унда иртәрәк барып эләкмәҫ өсөн кеше был донъя хакимдарының һәр һүҙен тыңларға мәжбүр. Ә ул бойороҡтар гонаһҡа илтеп, Аллаға ҡаршы булыуы ла бар. Бына шулай кеше Хоҙайҙың асыуын ҡабартыуын ҡайһы саҡта үҙе лә аңлап етмәй. Шуға күрә, кеше ерҙәге хакимдан түгел, ә күктәгеһенән ҡурҡырға тейеш.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Гәзиттә фенолог күҙәтеүҙәре, ырымдар, фараздар менән мәҡәләләр күренә башлауы ҡыуаныслы булды. Ҡыуанмай ни: үҙеңде уратып алған, һиңә йәшәйеш биргән тәбиғәт менән танышыу ғына түгел, бәлки, уның менән бәйләнеш, үҙ-ара мөнәсәбәт урынлаштырыуға ҡайтып ҡала бит был сығыштар. Әлбиттә, күптәр тәбиғәтте хозурланыу объекты итеп кенә күрә, әммә уны өйрәнергә, аңларға, ярҙамлашырға ынтылғандар ҙа бихисап. Тап шундайҙарҙың тәбиғәттең көтөлмәгән һынауҙарын да алдан күҙаллауы ихтимал.**



# КЕШЕЛЕК ҮҘЕНӘ-ҮҘЕ...

## ҡәбер соҡоро ҡаҙғандай тойола

Әммә тәбиғәт төп башына ла ултыртып ҡуя ул. Бына, мәҫәлән, үткән йәйгә өмөт бик ҙур ине: барыҫ йылы насар булмаҫ, тине фаразлаусылар. Әйтем дә бар: барыҫ йылы барын сәс, һис юғында, тары сәс. Сәстек. Үҫмәне. Ҡыштың мул ҡары ла, яҙғы һыуҙың тупраҡҡа һеңеүе лә ярҙам итмәне. Шәриф Биҡҡол ағай яҙғанса, "бар, ышан һин кәкүктәргә..."

Быйылғы йылға ла төрлө фараздар, ҡурҡытыуҙар, өркөтөүҙәр күп булды: йәнәһе лә, быйыл ҡыш үтә һалҡын буласаҡ, хатта Европа илдәрен һыуыҡта ҡатырасаҡ, Скандинавияны боҙ ҡаплаясаҡ. Сәбәбе: Мексика ҡултығының бысраныуы, Гольфстрим ағымы йүнәлеше үҙгәреүе, һ.б. Булыр. Экологик катастрофа, катаклизмдар булып тора. Бәлки, уларҙы алдан фаразлап та булмайҙыр. Әммә иҫкәртеп була. Ғәмәли эштәр менән. Ә төрлө симпозиумдарҙа хәбәр һөйләү генә тәбиғәтте лә һаҡламаҫ, һәләкәттәрҙе лә кисектерә алмаҫ.

Тәбиғәт, күрәһең, кеше йәберенә яуап бирә. Уйлап ҡараһаң, тәбиғи ағыш, тәбиғи алмашыныу ҡырҡа үҙгәрҙе һәм тәбиғәт был үҙгәрештәргә яраҡлашып, уларҙы "йотоп" өлгөрә лә алмай китә. Фәндең, техниканың ныҡлы алға китеүе кешелекте яңынан-яңы өлкәләрҙе үҙләштереүгә этәрә. Тик уларҙың ғәмәли әһәмиәтен генә аңлаған юҡ, улар кешелекте, тәбиғәтте йәшәтер йүнәлештә үҫһә, ҡана ла һуң! Кеше үҙенә үҙе ҡәбер соҡоро әҙерләгәндәй булып китә ҡайһы саҡта. Йыһанда ярты быуат ҡына гиҙһәк тә, унда йыйып та ала алмаҫлыҡ сүп-сар тупланған, йыһан караптарының иркенләп осоп йөрөрлөгө лә ҡалмай бара, тиҙәр. Ә самолеттар, хәрби ракеталар? Өр-яңы заводтар, төрлө типтағы ТЭЦ-тар? Ер өҫтөнән йөрөүсе техника? Бөгөн уларҙың барыһы ла үтә кәрәк һымаҡ. Әммә улар кешелекте яйлап юҡҡа сығарғанына иғтибар итмәйбеҙ. Үрҙә аталған "цивилизация" емештәренең климаттың глобаль үҙгәреүенә килтергәне асыҡ бит инде.

Тәбиғәтте күҙәтеү - үҙе бер хозурлыҡ, ул ҙур иғтибар һәм түҙемлек талап итә. Мәҫәлән, "Киске Өфө"лә Ейәнсура районынан Ҡасим Янбаевтың фенолог яҙмалары баҫылып сығып, ҡыҙыҡһыныу уятҡайны. Элек "Совет Башҡортостаны" гәзите даими рәүештә фенолог күҙәтеүҙәренә арналған материалдар бирә килде. Ҙур теләк менән Евгений Кучеров, Вафа Сөләймәнов яҙмаларын уҡыныҡ, уларға эйәрергә ынтылдыҡ, ҡыҙыҡһындыҡ.

Үҙем дә бик электән, үткән быуаттың 50-се йылдар башынан, ошондай яҙмалар алып барҙым, барам. Тәүге осорҙа яҙмаларым ябай ғына ине. Сөнки күҙәтеү балаларса, "Фенология" тигән төшөнсә юҡ. Әле термо-, барометрға иғтибар ителәә. Бофорттың ел көсө шкалаһына ла күҙ һалаһың. Үрҙә аталған күҙәтеү, һынамыш һөҙөмтәләрен яҙаһың. Осраҡан һәр мәғлүмәтте яҙма теркәп, туплап барырға ынтылам. Ҡыҙғаныс: фәнни эшкәртеү юҡ. Ауылдаштарым да минең шөғөл менән ҡыҙыҡһына. Ҡайһы саҡта көткәндәр аҡланмай ҙа ҡуя.

Селлә тураһында ла уртаҡ фекергә килергә ваҡыт (ул турала "Башҡортостан" гәзитенә яҙғайным да). Сөнки уны хәҙерге матбуғатта (гәзит-журнал, төрлө йылдарҙағы "Башҡортостан календары", "Башҡорт теле һүҙлеге") ҡышҡы селлә 25 декабрҙә, ә йәйгеһе 25 июндә башлана, тип бирә. Эйе, ай һандары дөрөҫ, әммә улар элек иҫке стиль менән йөрөтөлөр ине. Ҡышҡы селлә 8 ғинуарға тура килә (С 19-го января начинаются крещенские морозы, ти урыҫ). Ер тулыһынса туңып-ҡатып, һауа ныҡ һыуынғанда була ҡышҡы селлә. Халыҡ мәҡәлендәгесә, һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем, көнөм генә ҡыҫҡа, тигән февраль. Ә йәйге селлә 8 июль башланып, ер һеңдергән дымды тулыһынса быуға әйләндереп, һауа тотороҡло ҡоро ҡалғас була ("С этого дня ожидается еще сорок жарких дней", тип яҙа "Времена года" баҫмаһы).

Белмәйем, ҡурҡыталар ғынамы беҙҙе? Тыңлаһаң, уҡыһаң, ҡот алына: 2012 йыл ахырызаман килтерә, имеш. "Против России применено климатическое оружие?" тип яҙа "Единая Россия - Башкортостан" гәзите. "Нынешняя жара может стать привычной для России" тигән мәҡәлә баҫтырҙы "Российская газета". Ярай, беҙ - рәсәйлеләр, иманһыҙ халыҡ. Айныйбыҙ, иманыбыҙға ҡайтабыҙ, тибеҙ, ниндәйҙер илаһи ярҙамға өмөттәр бағлайбыҙ. Тик бына иманлы илдәр халҡын да тәбиғәт һәләкәттәре йәлләмәй бит.

Аллаһы Тәғәлә кешене (кешелекте) яралтҡан икән, ниңә ул үҙ бәндәһен шундай аламалыҡҡа - кешелек йәшәүенең нигеҙе булған тәбиғәтте юҡҡа сығарыуға йүнәлтә икән, тип тә уйланыла. В. Мичуринса, "Нам нечего ждать от природы, завоевать у нее - наша задача", тип уйламай-нитмәй әйткән һүҙҙәр артынан эйәреүебеҙме? Ниңә беҙ "завоевать" итеүҙәрҙең беҙҙе йәшәүҙән туҡтата икәнен һаман аңламайбыҙ?

Х. П. Погосян тигән берәү: "Метерология призвана решать многие важные для человечества проблемы. Из них две главные: первая - долгосрочный прогноз погоды, вторая - искусственное воздействие на атмосферные процессы с целью улучшения климата и регулирования погоды", тип яҙа "Атмосфера и человек" баҫмаһында. Быныһы йәшәү мөхитен яһалма юлға этәргәндәй. Тик тәбиғәт беҙгә буйһонормо?

Тәбиғәтте йәшәүебеҙ сығанағы итеп ҡарауҙы бала саҡтан аңға һеңдереү кәрәктер. Рәсәй халҡына ул өлкә ят күренеш. Ҡара тупраҡлы ер ҙә сүллеккә әйләнеүе бар. Бик боронғо дәүерҙә Ер йөҙө климаты үҙгәреү һөҙөмтәһендә күп тереклек, дәү динозаврҙарҙы ла ҡушып, юҡҡа сыҡҡанын онотмаһаҡ ине шул. Әлләсе. Тәбиғәт закондарына ҡаршы төрлө, яһалма ғәмәлдәр ҡылабыҙ. Кеше менән тәбиғәт араһында барған көрәштең дә сиге барҙыр.

Шулай ҙа күккә бағайыҡ, әйләнә-тирәләге тәбиғәт үҙгәрештәрен күҙҙән яҙлыҡтырмайыҡ. Һис юғында, ҡыҙыҡһынғандан ғына булһа ла. Бөгөнгөһө ҡиммәт.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөлә Волга буйы федераль округы субъекттарының мәғариф өлкәһендә идара итеүсе башҡарма власть органдары етәкселәренең кәңәшмәһе булып үтте. Һәләтле балалар менән эшләүҙә иң уңышлы тәжрибәне таратыу һәм уртаҡлашыу йәһәтенән һөҙөмтәле майҙансыҡҡа әүерелгән сарала Рәсәйҙең мәғариф һәм фән министры Андрей Фурсенко, БР Президенты Рөстәм Хәмитов, Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ярҙамсыһы Александр Школьник, Баш федераль инспектор Петр Капишников ҡатнашты.

✓ Мәғариф форумына килгән ҡунаҡтар Өфөнөң 39-сы һәм 3-сө гимназияларында, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге республика музыкаль, Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге һынлы сәнғәт гимназия-интернаттарында, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында булды.

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең бойороғо менән республика Хөкүмәтенә 2011 йылға "Өлкән йәштәгеләрҙең халыҡ университеты" айырым маҡсатлы программаһын эшләргә һәм раҫларға ҡушты. Программаның төп маҡсаттары - өлкәндәрҙең йәшәү сифатын яҡшыртыу һәм хәҙерге йәмғиәттә уларҙың яраҡлашыуы өсөн шарттар булдырыу.

✓ Республика Үҙәк һайлау комиссияһының сираттағы ултырышында БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесен һайлау мәсьәләһе ҡаралды. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы секретары Николай Конкин ултырышта ҡатнашыусыларға Рәсәй Федерацияһы Үҙәк һайлау комиссияһының был вазифаға Хәйҙәр Вәлиевтың кандидатураһын тәҡдим итеүе тураһында хәбәр итте. Йәшерен тауыш биреү юлы менән Хәйҙәр Арыҫлан улы Вәлиев БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе итеп һайланды.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә Премьер-министр урынбаҫары - Хөкүмәт Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов рәйеслегендә эшсе кәңәшмә булып үтте. Унда 2011-2015 йылдарға Урал аръяғы райондарының иҡтисади үҫешенең комплекслы программаһы проекты һуңғы редакцияла ҡаралды.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЛЕНИНДЫ ЕРЛӘҮ КЕМГӘ ФАЙҘАЛЫ?

## Ә шартлауҙар - кемгә?

**Үткән аҙнала Рәсәйҙә бер түгел, ике "бомба" шартланы. Береһе - ысыны, 35 кешене үлтергәне, йөҙҙән ашыу кешене йәрәхәтләгәне "Домодедово" аэропортында гөрһөлдәһә, икенсеһе, мәғлүмәт "бомба"һы - Интернеттың Рәсәй өлөшөндә, йәғни, Рунетта һәм матбуғатта яңғыраны. Тәүгеһен кем шартлатҡаны әлегә билдәһеҙ. Дөрөҫөрәге, уларҙың кем икәнлеге билдәле. Улар - бандиттар. Ҡаныҡҙар. Кеше ҡиәфәтендәге йыртҡыстар. Сығыштары, милләттәре, енестәре, йәштәре, исем-шәрифтәре - эйе, билдәһеҙ. Әммә бандит булыуҙары ап-асыҡ. Ябай кеше шартлатҡысты нисек эшләргә, нимәнән эшләргә, ҡайҙа йәшерергә, ҡасан шартлатырға белмәй. Уның башҡа эштәре күп. Ә бандиттар белә. Улар махсус рәүештә был "һөнәр"гә өйрәнә.**

Бандиттар бомбаны ни өсөн шартлата? Ни өсөн улар мәктәптәрҙе, самолеттарҙы, поездарҙы, баҙарҙарҙы, мәҙәниәт үҙәктәрен, стадиондарҙы, метроны, транспорт туҡталыштарын, автобустарҙы, хатта гидроэлектростанцияларҙы бомба утына тота? Аңлағанһығыҙҙыр, өҫтә аталғандар беҙҙең ил сиктәрендә һуңғы ун йыл эсендә генә булған терактар. Бандиттар бының менән илебеҙгә ниндәй зыян килтерергә теләй һуң? Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында, мәҫәлән, дошман тылындағы партизандар фашист эшелондарын шартлатҡанда был диверсияларҙы аныҡ бер маҡсат менән, йәғни немец-фашист ғәскәрҙәрен фронтҡа ебәрмәҫ өсөн эшләгән. Ә тыныс кешеләрҙе шартлатыуҙан террорсыларға ни файҙа? Эйе, кеше ресурстары юҡҡа сыға. Әммә эш унда ғына микән? Улар бит ошо акциялары менән ябай халыҡты үҙҙәренә ҡаршы ҡуя түгелме? Бер ниндәй мәғәнәһе булмаған эш түгелме был? Был тәү ҡарашҡа ғына. Асылда иһә террорсылар үҙҙәренең даими рәүештә ҡабатланып торған акциялары менән (Мәскәүҙә быға тиклемге теракт 2010 йылдың мартында метрола булды) граждандарға көслө һәм төптән уйланылған психологик баҫым яһай. Бомбаларҙың ҡайҙа һәм ҡасан шартлағанын граждандар алдан уҡ белеп торамы? Юҡ, әлбиттә. Кеше хоҡуҡ һаҡлау органдарының эшмәкәрлегенән бер ниндәй ҙә файҙа күрмәй. Милиция урамдарҙа эт тубығынан тип фекер йөрөтә ул, әммә уларға өҫтәмә хоҡуҡтар биреү, аҡса бүлеүҙең бер ниндәй ҙә мәғәнәһе юҡ, тип һанай. Халыҡ урамға сығырға ҡурҡа башлай. Магазинға сығып булмай. Унда шашынған милиционер пистолет тотоп кешеләргә уңлы-һуллы атып йөрөүе ихтимал. Балаһын мәктәпкә ебәрергә лә ҡурҡа кеше. Концертҡа, йәки мюзиклға барырлыҡ түгел. Кем белә, бәлки, унда ла бандиттар бәреп инер? Шул уҡ ваҡытта фатирҙа ла тыныс ҡына ултырып булмай. Хәтерләйһегеҙме, ваҡытында Мәскәүҙә, башҡа ҡайһы бер ҡалаларҙа торлаҡ йорттар шартлап күккә осто. Йөҙәрләгән кеше һәләк булды. Уларҙың яҡындары, туғандары, балалары кемде ҡәһәрләй? Бандиттарҙымы? Ай-һай! Үҙ граждандарына йәшәүгә хоҡуҡты (Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы, 20-се статья) тәьмин итә алмаған етәкселекте. Аңланығыҙмы? Террорсылар ошо акциялары менән халыҡты дәүләткә, кешеләрҙе етәкселәргә ҡаршы ҡуйырға маташа. Халыҡ ҡасан да булһа ил башлыҡтарының терроға ҡаршы эшмәкәрлегенә ризаһыҙлыҡ белдерер тигән маҡсат менән ойошторола шартлатыуҙар. Бына ҡалай төптән уйланылған сәйәсәт. Дәүләттең тамырына балта сабып, илдең именлеген ҡурҡыныс аҫтына ҡуя торған сәйәсәт.

Әхәҙер мәғлүмәт "бомба"һы тураһында. Мәғлүмәт "бомба"һын шартлатыр өсөн иһә бар халыҡтың иғтибарын йәлеп итерлек мәғлүмәтте (йәғни, "бомба"ны) табырға йәки уйлап сығарырға, уңайлы мәлде һайларға һәм ваҡытлы матбуғат саралары аша "шартлатырға", йәғни йәмәғәтселек иғтибарына ташларға кәрәк. Мәҫәлән, Владимир Ильич Лениндың кәүҙәһен Мавзолейҙан сығарып ерләү тураһындағы тәҡдим (йәки талап) һуңғы егерме йыл эсендә даими рәүештә яңғырап тора. Быйыл да шулай булды. Ленинды йыл һайын ерләргә маташыуҙарын аңларға мөмкин. Баш ҡаланың уртаһында тарихи Ҡыҙыл майҙанда махсус рәүештә ҡоролған йортта - Мавзолейҙа коммунистик йәмғиәт төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйған һәм уның төп тәғлимәттәрен иғлан иткән, улай ғына ла түгел, донъялағы тәүге социалистик дәүләткә нигеҙ һалған, бер нисә быуын совет кешеләре уны Алла урынына күреп табынған кешенең мумияһы (мәйете) ятһынсәле! Ул ҡора башлаған дәүләттең тарҡалып юҡҡа сығыуына ҡарамаҫтан, донъя пролетариаты башлығының мәйете һаман үҙ урынында икән, тимәк, коммунистик идеялар үлмәгән, тимәк, уларҙы тергеҙергә, ҡабаттан ҡорорға, аяҡҡа баҫтырырға мөмкин. Кеше шулайтып уйлауы мөмкин дә баһа. Ана, нацистарҙың идеологияһын төбө-тамыры менән йолҡоп алырға тырыштылар. Халыҡ-ара трибунал булдырылды. Нюрнберг процесы ойошторолдо. Нацистарҙы бөтә донъя буйлап эҙәрлекләп тоттолар, ҡулға алдылар, яуаплылыҡҡа тарттырҙылар. Германияла денацификация сәйәсәте үткәрелде. Нацизмдың башлығы Адольф Гитлерҙың зыяраты ла юҡ. Ә бөгөн нацистар Германияла ғына түгел, башҡа илдәрҙә лә, шул иҫәптән Рәсәйҙә баш күтәрә. Иртәгә заманалар үҙгәреп китһә, йәш быуын коммунистик идеялар менән ҡаңғыра башлаһа (ә бит социаль ғәҙеллек, тигеҙлек, туғанлыҡ идеялары бик ымһындырғыс, айырыуса егерме йыл эсендә төрлө ҡатламдарға бүленеп өлгөргән, ярлылар менән байҙар араһындағы упҡындың көнләп түгел, сәғәтләп киңәйгәнен һәм тәрәнәйгәнен күреп-белеп торған Рәсәй йәмғиәте өсөн) уларға табынырға Мавзолей һәм уның эсендә ятҡан Ленин мумияһы әп-әҙер.

Ленинды күптән уҡ ерләргә кәрәк ине. Беҙ кәмендә егерме йылға һуңланыҡ. СССР тарҡалып, коммунистар партияһы тыйылған бер мәлдә хәтерләйһегеҙме? Ана шул ваҡытта уҡ Ленинды Мавзолейҙан сығарып күмеп, компартияны ябып, уның енәйәттәрен асыҡлап (илде сәйәси һәм иҡтисади катастрофа алдына баҫтырыу, күпләп халыҡты ҡырыу, сталинизм, Хрущевтың волюнтаризмы, Брежневтың торғонлоғо, һ.б.) Нюрнберг процесы тибындағы халыҡ-ара трибунал үткәреп, яңы тормошто яңы биттән башларға ине лә бит...

Ә бөгөн Ленинды ерләү һуң инде. Мавзолей һәм уның эсендә ятҡан Ленин бөгөн идеология символы түгел, ул илебеҙҙең бренды, тауар билдәһе. Аңлатайыммы? Билдәле йәштәр гәзиттәре бар - "Комсомольская правда" һәм "Московский комсомолец". СССР ваҡытындағы исемдәрҙе улар яңы заманалар килеп еткәс тә үҙгәртергә теләмәй. Сөнки ул атамалар бөгөн тауар билдәһе. Үҙгәртһәләр, уҡыусыларын, реклама биреүселәрен, йәғни табышты юғалтасаҡтар.

Быға тиклем СССР һәм унан һуң Рәсәй сит илдәрҙә "балалайка, водка, селедка, матрешка" һүҙҙәре менән билдәләнде. Ә хәҙер "пирамидалар һәм фараондар Египетта ғына түгел, Рәсәйҙә лә бар" тиергә мөмкин. Мавзолей булмаһа, сит ил туристарына Ҡыҙыл майҙанға килеүҙең ҡыҙығы ҡалмаясаҡ. Ә бит әле Рәсәйҙә лә Мәскәүҙә булмаған, Мавзолейҙы күрмәгән кеше күп. Быйыл Ленинды ерләү тураһында тауыш күтәргән һәм хатта Интернетта goodbyelenin.ru тип аталған махсус сайт асҡан кеше Дәүләт Думаһында иң эре фракцияға эйә булған "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзаһы, имеш. Һайлауҙар алдынан улар шулайтып үҙ партияһының абруйын күтәрергә булған, йәнәһе. Әммә уларҙың пландарын "Домодедово" аэропортында булған теракт юҡҡа сығарҙы. Бер ғәйепһеҙ кешеләр һәләк булғанда, кем мумияны ерләү-ерләмәү тураһында баш ватһын инде?

"Домодедово"лағы терактҡа әйләнеп ҡайтырға ваҡыт етте. Ғәҙәттәгесә, ике һорауға яуап табырға маташайыҡ. Кем ғәйепле? Һәм ни эшләргә? Әлбиттә, бандиттар ғәйепле, тиерһегеҙ. Һис шикһеҙ. Уларға ҡаршы торорлоҡ, эҙәрлекләп ҡулға алырлыҡ, шартлауҙарҙы туҡтатырлыҡ көс юҡмы ни илебеҙҙә? Бар, әлбиттә. Эске эштәр министрлығы, Федераль именлек хеҙмәте. Тимәк, улар беҙҙе, ябай халыҡты шартлауҙарҙан һаҡлай, террорсыларҙан яҡлай алмай булып сыға инде. Ғәҙәттән тыш хәл булһа ҡалһа, сит илдәрҙә яуаплы вазифалар биләгән түрәләр эштән китә. Ә беҙҙекеләр...

Мәҫәлән, эске эштәр министрын алайыҡ. Ул, йәғни Рәшит Нурғәлиев 2002 йылдан бирле Эске эштәр министрлығында эшләй - тәүҙә министрҙың беренсе урынбаҫары вазифаһында, 2008 йылдың 31 декабренән министр вазифаһында. Ошо осорҙағы фажиғәләрҙе күҙҙән үткәрәйек. Ә 2004 йылдың 9 майында Грозный ҡалаһында стадионда шартлау һөҙөмтәһендә Чечня президенты Әхмәт Ҡадиров һәләк була. Ошо уҡ йылдың 24 авгусында Рәсәй күгендә Тула һәм Ростов өлкәләрендә ике пассажир самолеты шартлай, 90 кеше һәләк була. 31 августа Мәскәү метроһының "Рижская" станцияһы эргәһендә бомба шартлатыла. Ундан ашыу кеше һәләк була. 1 сентябрҙә террорсылар Беслан ҡалаһындағы мәктәпте баҫып ала. 350-нән ашыу кеше һәләк була, күбеһе балалар. 2005 йылдың 13 октябрендә Нальчик ҡалаһында террорсылар Эске эштәр министрлығы, Федераль именлек хеҙмәте идаралығы биналарына һөжүм итә. 50-ләп кеше, шул иҫәптән Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре һәләк була. 2006-ла, 2007-лә, 2008-ҙә, 2009-ҙа ла булды бындай террор ҡорбандары. Ниһайәт, 2010 йылдың 29 мартында Мәскәү метроһында бер-бер артлы ике шартлау яңғырай. 40 кеше һәләк була.

Ә Рәшит Нурғәлиев 2005 йылда Урыҫ православие сиркәүенең Дмитрий Донской ордены менән наградлана, ошо уҡ йылда армия генералы дәрәжәһенә эйә була. 2006 йылда Карелия Республикаһының почетлы гражданы исемен ала. Ошо уҡ йылда Чечен Республикаһының Әхмәт Ҡадиров ордены менән бүләкләнә.

Шулай итеп, шартлауҙар илде дер һелкетә. Әйткәндәй, "Домодедово" аэропортындағы шартлауҙан һуң Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев "транспорт милицияһын дер һелкетеп алырға" тәҡдим иткәйне. Ахыры, "таяҡтың ауыр башы" уларға ғына эләгәсәк.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Былтырҙан алып интернетта дәүләт хеҙмәте порталы эшләп килә. Хәҙер Рәсәй граждандары йәшәгән урын буйынса теркәлеү тураһында ғаризаны интернет аша ла бирә ала. Бының өсөн www.gosuslugi.ru сайтына Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙең берҙәм порталына инергә генә кәрәк. Анкета дөрөҫ тултырылғанмы-юҡмы, уны ла гражданға электрон почта аша хәбәр итәсәктәр.

✔2010 йыл аҙағында 10 км-ҙан ашыу арала почта таратыусы почтальондар өсөн 100-гә яҡын велосипед һатып алынды. Бындай маршруттар республика буйынса барлығы 400 самаһы. Федераль почта хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы идаралығы был эште артабан да дауам итергә ниәтләй.

✔Ошо көндәрҙә Салауат ҡалаһындағы спорт мәктәбендә шөғөлләнеүсе балаларҙың "Юрматы" хоккей командаһы Америкала үткән халыҡ-ара турнирҙа ҡатнашып ҡайтты. Улар донъяның иң көслө 24 балалар командаһы араһында алтынсы урынға сыҡты.

✔Былтыр йыл аҙағында БР Президенты Өфөлә РФ Дәүләт Советы Президиумының милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса ултырышын үткәреү тураһындағы тәҡдим менән сығыш яһағайны. Тәҡдим ил етәкселеге тарафынан хуплау тапты һәм сараның февраль айында үткәрелеүе көтөлә. Шуға бәйле, "Башинформ" агентлығында "Традицион диндәр Башҡортостанда тыныслыҡты нығытыу яҡлы" тигән матбуғат конференцияһы үтте. Унда БР Президенты ҡарамағындағы дәүләт һәм конфессиялар араһындағы мөнәсәбәттәр буйынса совет рәйесе Вячеслав Пятков, Рәсәйҙең Үҙәк Диниә назараты рәйесе, юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, Өфө һәм Стәрлетамаҡ архиепископы Никон, БР мосолмандары Диниә назараты рәйесе Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин, Өфөнөң һәм БР-ҙың баш раввины Дан Кричевский ҡатнашты.

✔БР Хөкүмәтенең элекке Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов "Электрозавод" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнде. Ул бөтә кимәлдәге власть структураларында был компанияның мәнфәғәтен ҡәүҙәләндерәсәк.

✔Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы 2011 йылды Халыҡ-ара химия йылы тип иғлан итте. Уның девизы - "Химия - беҙҙең тормош, беҙҙең киләсәк".

*✓ Пособие артабан да түләнеүен теләүселәр 2011 йылдың 31 майына тиклем йәшәгән урыны буйынса социаль яҡлау органдарына ғаиләһенең килемен раҫлаусы документтар тапшырырға бурыслы.*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# УЛЛЫҠҠА АЛЫУСЫҒА...
## әсәлек капиталы

**Республикала тәрбиәгә бала алған ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында мәсьәлә хәл ителә. Ғинуар айында БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары тәрбиәгә бала алырға йыйынған ғаиләләргә ҡағылышлы закон проектын ҡараны. Әгәр ҙә был закон ҡабул ителһә, аҫырауға алынған һәр бала өсөн әсәлек капиталы күләмендә бер тапҡыр пособие түләнәсәк.**

БР мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин һүҙҙәре буйынса, бөтә сығымдарҙы (пособие күләме 343 378 һум) республика бюджеты ҡаплаясаҡ. Ғаиләгә уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) ике һәм унан да күберәк бала алынған осраҡта уларҙың һәр береһенә түләнәсәк. Был аҡсаны ғаилә торлаҡ яҡшыртыуға, балаға белем биреүгә, уны дауалауға йәки санаторийҙа сәләмәтлеген нығытыуға тотона ала.

Бөгөн тәрбиәгә бала алыуҙың төрлө формалары ҡулланыла. Әммә баланы уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыу баланы ғаиләгә урынлаштырыуҙың иң камил юлы иҫәпләнә. Бары тик уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусы ғына ата-әсә хоҡуғына эйә була, улар ғына балаға фамилияһын бирә ала. Дәүләт бюджеты өсөн дә был ысул ҡулайыраҡ, сөнки, мәҫәлән, опекундан айырмалы рәүештә, уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусыларға ай һайын бала ҡараған өсөн пособие түләргә кәрәкмәй.

БР-ҙың бала хоҡуҡтары буйынса вәкиле Лилиә Ғүмәрова ла был тәҡдимде хуплауын белдерә. Уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған бала ғына ғаиләлә туғанға әйләнә һәм яҡшы тәрбиә ала. Шул уҡ ваҡытта тәрбиәгә бала алырға теләүселәр менән шөғөлләнеүсе белгестәрҙең юғары квалификациялы булыуы мөһим - был эштә хаталар булырға тейеш түгел.

Тәрбиәгә бала алыусыларға матди ярҙам күрһәтеү - көнүҙәк мәсьәлә, тик ул насар уйлы кешеләрҙе йәлеп итмәһен. Бындай ғаиләләрҙе тикшереп тороу ҡатмарлы мәсьәлә, сөнки уллыҡҡа алыу сере закон тарафынан һаҡлана. Бына шуның өсөн дә йөрәк ҡушыуы буйынса бала алырға теләүсене матди файҙа эҙләүсенән айыра белеү бик кәрәк.

# ЛЕНИН УРАМЫНАН...
## йәйәүләп

**Баш ҡала етәкселеге Ленин урамында транспорт хәрәкәтен бер яҡлы итеп ҡалдырырға, йәиһә бөтөнләй йәйәүлеләр урамына әйләндерергә уйлай. Был Өфөләге автомобиль тығындарын юҡҡа сығарырға һәм үҙәкте транспорттан бушатырға мөмкинлек бирәсәк.**

Ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк белдереүенсә, автомобиль ағымының бер өлөшө Карл Маркс, Цюрупа һәм Аксаков урамдары буйлап үтәсәк.

Әммә был яңылыҡ бар өфөләләргә лә оҡшап етмәй. Водителдәр фекеренсә, күп кенә офистар тап Ленин урамында урынлашҡан, шуға ла был урамдан машиналар йөрөмәүе күп уңайһыҙлыҡтар тыуҙырасаҡ. Бөтә Рәсәй автомобилистар йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе рәйесе Ирек Булгаков быны машина йөрөтөүселәрҙең хоҡуғын боҙоу, тип иҫәпләй. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре лә автомобилселәр яҡлы. Баш дәүләт автоинспекторы Динар Ғилметдинов был осраҡта үҙәктә хәрәкәт бөтөнләй туҡтап ҡалыуы ихтимал, тип белдерә.

Шул уҡ ваҡытта ҡала етәкселәре автомобиль тығындарына ҡаршы ныҡлап көрәш асмаҡсы. Тейешһеҙ урынға парковкаланған автомобилде штраф туҡталышына эвакуациялау мәсьәләһе лә ҡарала. Ҡала үҙәгендә эшләгән кешеләргә машиналарын ҡуйырға урын етмәүе көн кеүек асыҡ. Булғандары ла эшләгән кеше өсөн уңайһыҙ, мәҫәлән, Ҡунаҡһарайҙа унын хаҡы 50 һум. Етмәһә, был урындарҙа машинаны 5 сәғәткә генә ҡуйырға ярай.

-Юл ситендә ҡалдырылған автомобилдәр юл хәрәкәтенә ҡамасаулай, - ти Владимир Дмитрюк. - Был проект буйынса эш әлегә тамамланмаған, әле унын юридик һәм финанс яғы тикшерелә.

ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре был яңылыҡҡа ла ҡаршы.

-Иң тәүҙә машиналар ҡуйыу өсөн тәғәйенләнгән урындар булдырырға, тәртип боҙоусылар булһа, һуңынан уларҙы язаға тарттырырға кәрәк, - ти Динар Ғилметдинов.

# ЗАКОНЫ ЯҢЫ ЛА...
## тәртибе элеккесә

**1 ғинуарҙан гастарбайтерҙарға ҡағылған яңы закон үҙ көсөнә инде. Хәҙер сит ил граждандарына баҙарҙарҙа һәм урамдарҙа һатыу итеү тыйыла. Улар шулай уҡ алкоголле эсемлек һәм фармацевтика тауарҙары менән сауҙа итергә тейеш түгел.**

Бындай закон 2007 йылда ҡабул ителгәйне. Бер йылға ғына иҫәпләнгәнлектән, ул һәр йыл һайын яңыртылып тора. Сит ил граждандарын сауҙа итеүҙән дүртенсе йыл рәттән тыйһалар ҙа, баш ҡалала уларҙың иҫәбе кәмемәй. Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр Башҡортостанға бөтәһе 79 мең сит ил граждандары килгән. 2009 йыл менән сағыштырғанда, был һан 3,4 процентҡа кәмерәк. Республикаға эшкә килеүселәрҙең күбеһе виза режимы булмаған илдәрҙән - Тажикстан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Азербайжан һәм Әрмәнстандан.

2010 йылда республиканың миграция хеҙмәте 23 меңдән ашыу тикшереү үткәргән. 11 меңдән ашыу сит ил граждандары закон боҙғаны өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Мәҫәлән, Затон баҙарында ғына инспекторҙар республикала теркәүһеҙ йәшәгән 30 кешенән торған төркөмдө асыҡлаған. Уларҙың 14-е хеҙмәт эшмәкәрлеге менән законһыҙ шөғөлләнгән. 5-әүһен ҡаҙна иҫәбенә тыуған яҡтарына оҙатырға тура килгән.

# ЕР МӘСЬӘЛӘҺЕ ӨСӨН...
## тағы бер йыл

**БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтайҙың былтыр йыл аҙағында ҡабул иткән законына ярашлы, граждандарға ауыл хужалығы ерҙәре биләмәһен бушлай хосусилаштырыуға тағы бер йыл ваҡыт бирелде. БР ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Илдар Әминев белдереүенсә, был иң тәүҙә райондарҙағы урындағы үҙидара органдары властары һәм хужалыҡтарҙың ауыл хужалығы ерҙәре биләмәһен бушлай хосусилаштырыу комиссияларына граждандарҙы исемлеккә индереү һәм тейешле ер өлөштәрен бүлеп биреүҙе талап иткән суд ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу өсөн кәрәк.**

Илдар Әминев әйтеүенсә, бөгөнгө көнгә хоҡуҡтары боҙолған граждандар, ер өлөшө алып та төрлө сәбәптәр менән уларҙан баш тартыусылар, шулай уҡ хужаһыҙ ҡалған ер биләмәләре барлығы билдәле.

Бер тапҡыр бушлай ер өлөшө алырға хоҡуҡлы граждандарға ауыл хужалығы ерҙәре биләмәләренән ер бүлеп биреү процедураһын башҡарған саҡта "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында"ғы республика законы нормаларына һәм БР Хөкүмәте ҡарарҙарына таяныу мөһим. Илдар Әминев фекеренсә, һәр хужалыҡта йәки ауылда эске хужалыҡ комиссияларын яңынан булдырып, унда хоҡуҡи яҡтан белемле белгестәр индерергә кәрәк.

-Бынан тыш, хосусилаштырыу эске хужалыҡ комиссияһы тарафынан төҙөлгән һәм киң мәғлүмәт саралырында баҫтырылған хосусилаштырыуҙа ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итә башлауы тураһындағы мәғлүмәти белдереүҙән башланырға тейеш. Ғаризаға ҡушып, ауыл хужалығы ерҙәре биләмәһенән ер өлөшөн бушлай хосусилаштырыуға хоҡуҡ биргән документтар ҙа тапшырыла. Был ғариза бирелгән көнөндә үк теркәү китабында теркәлергә тейеш. Ғаризалар ҡабул ителеү ваҡыты, был мәсьәлә буйынса үткәреләсәк дөйөм йыйылыштың көнө, ваҡыты һәм урыны мәғлүмәти белдереүҙә күрһәтелә. Ер алырға теләк белдереүселәр ғаризаны ике ай эсендә биреп өлгөрөргә тейеш, ти министр урынбаҫары.

# БАШҠОРТ БАЛЫ...
## исемен тағы аҡланы

**Иҫегеҙҙә булһа, 2005 йылда республикабыҙҙың төп татлы аҙығына рәсми рәүештә "Башҡорт балы" тигән исем бирелгәйне.**

2010 йылдың 22 ғинуарында Роспатентҡа Умартасыларҙың төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһынан ялыу килә. Йәнәһе, балдың географик атамаһы булырға тейеш түгел һәм "Башҡорт балы" тигән брэндты теркәү дөрөҫ түгел. Был ойошма ағзалары фекеренсә, балдың ҡайҙа йыйылған икәнлеген билдәләп булмай.

Баҡтиһәң, республиканың умартасылыҡ һәм апитерапия үҙәге "Башҡорт балы" брэнды аҫтында контрафакт бал һатҡаны өсөн был йәмәғәт ойошмаһының бер структур бүлексәһен, аныҡлап әйткәндә, "Медовая долина" ойошмаһын судҡа бирә. Үҙәктең генераль директор урынбаҫары Елена Ғәбиҙуллина әйтеүенсә, ойошма үҙ сиратында Роспатентҡа ғариза яҙа. Бер йыл тикшереүҙәр алып барғандан һуң, Интеллектуаль милек, патент һәм тауар билдәһе буйынса Федераль хеҙмәттең эксперт комиссияһы ҡарар сығарҙы. Улар "Башҡорт балы"на таныҡлыҡты ғәмәлдә ҡалдырҙы. Брэндта географик атама ла ҡаласаҡ.

# ПОСОБИЕ БУЙЫНСА...
## "ҡыҙыу линия"

**БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан белдереүҙәренсә, "Башҡортостан Республикаһында балаға айлыҡ пособие тураһында"ғы Законға үҙгәрештәр индерелде.**

Законға ярашлы, пособие ғариза биреүсенең һәм ғаилә ағзаларының килемен күрһәтеүсе документтарға ярашлы билдәләнә. 2010 йылдың 13 декабренә тиклем билдәләнгән граждандарға пособие ағымдағы йылдың ғинуар һәм февраль айҙарында түләнәсәк һәм 1 марттан туҡтатыласаҡ. Пособие артабан да түләнеүен теләүселәр 2011 йылдың 31 майына тиклем йәшәгән урыны буйынса социаль яҡлау органдарына ғаиләһенең килемен раҫлаусы документтар тапшырырға бурыслы. Был осраҡта түләнмәгән айҙар (әммә документ тапшырылған айға тиклемге өс ай өсөн генә) өсөн пособие түләнәсәк. Бөтә һорауҙар буйынса урындағы халыҡты социаль яҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә. Шулай уҡ БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында ойошторолған "ҡыҙыу линия"ға эш көндәрендә 9.00-18.00 сәғәттәрҙә 273-52-12 номеры буйынса шылтырата алаһығыҙ.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Оператив ултырышта билдәләнеүенсә, былтыр Өфөлә авария хәлендәге йорттарҙан 5 меңләп кеше яңы фатирҙарға күсерелгән, 90 торлаҡ йорт ремонтланған, 186 лифт алмаштырылған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Ҡаланың комплекслы программаһында ҡаралған сараларҙың тормошҡа ашырылыу барышы тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, программаға баш ҡала тормошонон төрлө өлкәләренә ҡараған 73 сара индерелгән. Мөһим сараларҙың береһе итеп ҡала предприятиелары эшенең һөҙөмтәлелеген күтәреү буйынса комиссия эше билдәләнде. Комиссия 3 меңләп предприятие һәм шәхси эшҡыуарҙарҙың эшен ҡарап, уларҙың бюджетҡа төрлө кимәлдәге бурыстарын кәметеүгә өлгәшкән.

✓Өфөнөң мәғариф учреждениеларына уҡытыуҙың инновация технологиялары индереү дауам итә. "Беҙҙең яңы мәктәп" федераль программаһы буйынса 9 мәктәптә башланғыс белем биреүҙең яңы стандарттары һынау үтә. Ике йыл инде ҡалала зәғиф балаларҙы дистанцион уҡытыу буйынса инновацион проект тормошҡа ашырыла. Балаларҙың туҡланыуын ойоштороуҙы камиллаштырыу программаһына ярашлы 10 ашхана ремонтланып, заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылды. Бөгөн мәктәп уҡыусыларының 98 проценты ҡайнар аш менән тәьмин ителә.

✓Өфөлә Бәлиғ булмаған хоҡуҡ боҙоусыларҙы ваҡытлыса тотоу үҙәге асылды. Ул Черниковка биҫтәһендә, Пекин урамындағы 5-се йорт адресы буйынса урынлашҡан. Бында енәйәт ҡылған, закон боҙған, әммә енәйәт яуаплылығына йәше етмәгән балалар суд ҡарары нигеҙендә урынлаштырыласаҡ.

✓Баш ҡаланың ҡулланыу баҙарында хәл тотороҡло иҫәпләнә. Былтыр ғына йыл башынан 150 яңы сауҙа объекты файҙаланыуға тапшырылған. 3 млрд һумлыҡ инвестиция үҙләштерелгән һәм 2 мең эшсе урыны булдырылған.

✓Өфөлә мәғариф мосолман үҙәге лә булған яңы мәсет төҙөйәсәктәр. Ул Октябрь проспекты менән Трамвай урамдары киҫелешендәге Калинин паркында урынлашасаҡ. Буласаҡ мәсеттең нигеҙенә тәүге таш февраль аҙағында тантаналы шарттарҙа һалынасаҡ.

✓ ***Улар бер йыл эсендә күктә нисек хәрәкәт итә, мифта шул эҙмә-эҙлелектә бирелә. Боронғо башҡорттар үҙҙәренең "Урал батыр" календарына эйә булып, төнгө күкте күҙәтеп, Арҡайым цивилизацияһын барлыҡҡа килтергән.***



# АТА-БАБАЛАРЫБЫҘҘЫҢ...
## йондоҙҙарҙы яҡшы белгәне

**Халҡыбыҙҙың аҫыл гәүһәрҙәренең береһе булған "Урал батыр" эпосы үҙендә бихисап серҙәр һаҡлай. Мәҫәлән, "Урал батыр"ҙы төрлө йүнәлештә тикшергән тарихсы ғалим, лингвист, донъя фәнендә башҡорт фәлсәфәһенә нигеҙ һалыусы Салауат ҒӘЛЛӘМОВ эпостағы белем-мәғлүмәттәрҙе математиктар һәм астрономдар ҙа үҙ эшендә ҡуллана ала, тип раҫлай. Ул "Урал батыр" эпосын Арҡайым архитектураһына яраштырып һәм сармат алтын боландары тураһындағы мәғлүмәттәрҙән сығып, бронза дәүерендәге башҡорт йондоҙнамәһе циклын тулыһынса тергеҙҙе һәм боронғо башҡорттар астрономияһының һинд-герман фәнен булдырыу тарихындағы мөһим әһәмиәтен бар донъяға танытты. Ғалимдың был асышы, ғөмүмән, "Урал батыр" эпосы үҙе Нобель премияһына лайыҡлы.**

**-"Урал батыр"ҙың йөкмәткеһен астрономия күҙлегенән ҡарағанда, ул боронғо календарҙы кәүҙәләндерә икәне ап-асыҡ төҫмөрләнә, - тип һөйләй Салауат Ғәлләмов. - Унда ерҙең Төньяҡ ярымшарының йондоҙнамә циклын тәшкил иткән һәм төнөн күктә күҙәтеү мөмкин булған барлыҡ йондоҙлоҡтар көҙгөләге кеүек сағыла. Улар бер йыл эсендә күктә нисек хәрәкәт итә, мифта шул эҙмә-эҙлелектә бирелә. Был боронғо башҡорт астрономдарының күктәге йондоҙҙарҙы яҡшы белеүен һәм йондоҙнамә календары буйынса йәшәүен дә раҫлай. Боронғо башҡорттар үҙҙәренең "Урал батыр" календарына эйә булып, төнгө күкте күҙәтеп, Арҡайым цивилизацияһын барлыҡҡа килтергән. Бындай милли календарь тағы ла ер эшкәртеүсе ҡайһы бер мәҙәни халыҡтарҙа - гректар, индустар, ирандар, римдар, ҡытайҙар, японлар һәм Америка ҡитғаһында йәшәүсе майя индеецтарында ғына бар һәм улар ҙа үҙҙәренең ошо календары буйынса сәсеү өсөн уңайлы ваҡытты билдәләгән, һауа торошоноң үҙгәреүен белгән.**

**Башҡорттарҙың борон ер эшкәртеүсе, иген сәсеүсе халыҡ булыуын Һабантуй байрамы ла раҫлай. Ә ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, алтай, монгол кеүек күсмә халыҡтарҙа, хатта рустар, украиндар һәм белорустарҙа ла ергә бәйле бер ниндәй байрам да юҡ. Башҡорттарҙың мәҙәниәте күсмә халыҡтарҙыҡынан айырыла, тимәк, башҡорттарҙың ата-бабалары Алтайҙан килгән, тигән теория тулыһынса ялған һәм фәнгә ҡаршы булып сыға. Башҡорттар, Арҡайымдағы археологик ҡаҙыныуҙар раҫлауынса, төркиҙәрҙән һәм алтайҙарҙан айырмалы, бойҙайҙы һәм һолоно бронза быуаты эпохаһында, беҙҙең эраға тиклем икенсе быуатта уҡ сәскән. Шуға күрә башҡорттарҙың "Урал батыр" милли календары буйынса үткәреү ваҡыты билдәләнгән ер эшкәртеү байрамы - Һабантуйы булыуы бөтөн ҡанундарға ярашлы.**

**Башҡорт календарының боронғолоғо мәсьәләһен тикшергәндә фән өсөн икенсе мөһим асышҡа юлығабыҙ. Башҡорт календарында йондоҙнамәнең Һиндостанда ла, Грецияла ла бер үк булған барлыҡ йондоҙлоҡтары ла күрһәтелгән. Әммә төп айырма шунда: "Урал батыр" мифында барлыҡ йондоҙлоҡтар ҙа бер хикәйәттә бирелгән һәм улар йондоҙнамәне тәшкил итә. Ә Һиндостанда ла, Грецияла ла шундай берҙәм генә миф юҡ, ә һәр йондоҙлоҡ бер-береһе менән бәйләнмәгән төрлө мифтар менән аңлатыла. Бынан тыш, Уралда күренгән Төньяҡ ярымшарҙың ҡайһы бер йондоҙҙары, мәҫәлән, Өлкәр йондоҙо (Полярная звезда) Грецияла ла, Һиндостанда ла күренмәй. Ошо һәм башҡа сәбәптәр буйынса Европа ғалимдары, мәҫәлән, индолог-санскритолог профессор Макс Мюллер бынан 150 йыл элек үк, боронғо индустар, гректар, латиняндар (римляндар) йондоҙнамә йондоҙлоҡтары тураһындағы белемде Төньяҡтан алған, тигән. Төньяҡ, Себер, Волга буйы халыҡтарының береһенең дә йондоҙнамәнең 12 йондоҙлоғон телгә алған мифтары юҡ, тимәк, индустар, эллиндар, латиняндар астрономик календарҙы беҙҙең эраға тиклем икенсе быуатта Арҡайым мәҙәниәте сәскә атҡан дәүерҙә тап башҡорттарҙан алған. Тап башҡорт календары "Урал батыр" барлыҡ һинд-герман календарҙарының нигеҙендә ята. Гректарҙан ул Римға күскән, һуңынан уға император Юлий Цезарь үҙенең исемен биргән. Быуаттар үткәс, Юлиан календарына Ватикан папаһы Григорий яңынан үҙ исемен бирә. Шулай итеп, бөгөнгө көндә бөтөн донъя шул боронғо башҡорт-григориан календары менән йәшәп ята. "Урал батыр" эпосы һәм календары башҡорттарҙың ошо ерҙә борондан йәшәүен, уларҙың юғары мәҙәниәтен һәм астрономияла, математикала тәрән белемен раҫлай. Хәҙер, ошоларҙы белгәс, һәр башҡорт ваҡытты һәм көндәрҙе ҡасандыр ата-олатайҙарыбыҙ тарафынан әҙерләнгән "Урал батыр" милли календары буйынса дөрөҫләп йәшәргә тейеш. Әле беҙ уны "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

# "УРАЛ БАТЫР"

***Һыуғояр йондоҙлоғо***
***Апрель***



*Урал юлға сыҡҡан, ти:*
*Йәншишмәгә барған, ти,*
*Һыуын уртлап алған, ти;*
*Үҙе сапҡан юлына,*
*Дейеүҙән өйгән тауына*
*Һыуҙы шунда бөрккән, ти.*
*"Тау-урмандар йәшәрһен,*
*Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,*
*Ҡошо һайрап маҡтаһын,*
*Халҡы йырлап хуплаһын,*
*Ерҙән ҡасҡан дошмандар*
*Быны күреп һоҡланһын,*
*Ил һөйәргә ил булып,*
*Ер һөйөргә баҒ булып,*
*Дошман күҙен ҡыҙҙырып*
*Балҡып торор ер булһын!" -*
*Тигән һүҙен әйткән ти.*
*Һыу күп һипкән еренән*
*Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,*
*Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,*
*Эҫегә лә кипмәҫлек,*
*Ҡорт, мыр-маҙар төшмәҫлек,*
*Япрағы төрөлөп,*
*Беҙәнәктәй булған, ти,*
*Мәңге йәшел ҡалған, ти.*




***Аҡҡош йондоҙлоғо***
***Май***

*Берҙән-бер көн дүртәүләп,*
*Былар ауға киткән, ти,*
*Күп ерҙәрҙе үткән, ти;*
*Күп йән алып, шатланып,*
*Ауҙан былар ҡайтҡан, ти.*
*Аулап алған ҡоштарҙың*
*Араһында бер аҡҡош,*
*Ҡанлы йәшен түккән, ти,*
*Үҙ зарыны әйткән, ти:*
*"Ил күрергә сыҡтым мин,*
*Ер ҡошонан түгелмен, -*
*Йәшәй торған илем бар,*
*Бар ҡоштарға баш булған,*
*Самрау атлы атам бар.*
*Ике балаһы булған,*
*Һис ауырыу күрмәгән,*
*Һис берәүһе үлмәгән,*
*Әле лә батша атайым,*
*Ебәрегеҙ һеҙ мине,*
*Үҙ илемә ҡайтайым.*
*Мине бүлеп ашап та,*
*Сәйнәп мине йотоп та*
*Барыбер аш булмамын,*
*Һис аш булып һеңмәмен;*
*Йәншишмәнән һыу алып,*
*Әсәм тәнем йыуҙырған.*
*Үҙ нурына һуғарған*
*Барығыҙға билдәле*
*Ҡояш тигән әсәм бар".*

***Балыҡ һәм Пегас йондоҙлоҡтары***
***Март***

*Шүлгән таяҡ алғас та,*
*Һомайҙы ла көтмәйсе,*
*Айһылыуҙы күрмәйсе,*
*Самрауға әйтмәйсе,*
*Бер аяҡ ҡырға сыҡҡан да,*
*Таяҡты бер һуҡҡан да,*
*Барыһын һыуҙа баҫтырған,*
*Һәләкәткә ҡалдырған.*
*Зәрҡум быны күргәс тә,*
*Ҙур бер балыҡ булған да,*
*Янына барған Һомайҙы*
*Шул урында ҡарпыған.*
*Зәрҡум ҡыҙын ҡарпығас,*
*Күктә ҡояш тотолған,*
*Быны Аҡбуҙ белдергән,*
*Аҡбуҙ даръяға сумған,*
*Даръя гөрләп ҡайнаған.*
*Һомайҙың да юҡлығын*
*Барыһы ла аңлаған.*
*Аҡбуҙ даръяны быуғас,*
*Зәрҡумға юл булмағас,*
*Һомайҙы ул ебәргән.*




***Йылан йөрөтөүсе һәм Йылан йондоҙлоҡтары***
***Февраль***




*Берҙән-бер көн Әзрәҡә*
*Зәрҡум менән Шүлгәнгә*
*Самрау батшаның ҡыҙын,*
*Булат ҡылыс, Аҡбуҙын*
*Ала торған юлыны,*
*"Аҡбуҙатҡа менгән ир,*
*Булат ҡылыс тотҡан ир -*
*Бөтә донъя йөҙөндә*
*Иң ҙур батыр булыуҙы,*
*Барын баш эйҙереүҙе*
*Теҙеп һөйләп аңлатҡан", -*
*Төрлө яҡлап самалап*
*Ҡул тамырыны тартҡан.*
*Шүлгәнгә быны аңлатҡас,*
*Һомайҙы ил маҡтағас,*
*Яуға ҡалһа, аҙағы*
*Дейеү ҙә бирәм тигәс,*
*Шүлгән бармаҡ булған, ти,*
*Зәрҡум, Шүлгән икәүһе*
*Үҙ-араһы һөйләшеп,*
*Бер дейеүгә менгәшеп,*
*Самрау батша иленә*
*Икәү бергә киткән, ти.*

***Геркулес һәм Аждаһа йондоҙлоҡтары***
***Ғинуар***

*Шул саҡ һарай ишеген*
*Бер аҡ йылан асҡан, ти;*
*"Был кем бында инеүсе,*
*Һис кешегә теймәҫтәй*
*Таяғымды алыусы?", - тип,*
*Йылан килеп Уралға,*
*Йотайым тип, уҡталһа,*
*Урал тотоп алған, ти,*
*Ергә урап һалған, ти.*



**Игеҙәктәр йондоҙлоғо**
**Июнь**

Борон-борон борондан,
Кеше-маҙар килмәгән,
Килеп аяҡ баҫмаған,
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән,
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын.
Унда булған ти борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, уларға
Ул урында юл асыҡ.
Был ҡарт менән был ҡарсыҡ
Ҡайҙан бында килеүен,
Ата-әсә, ер-һыуы
Ҡайҙа тороп ҡалыуын
Үҙҙәре лә онотҡан, ти;
Икәүҙән-икәү шул ерҙә
Башлап ғүмер иткән, ти.
Тора-бара ул икәү
Ике уллы булып киткән, ти, -
Шүлгән булған олоһо,
Урал булған кесеһе.






**Волопас йондоҙлоғо**
**Июль**

Урал, Шүлгән икәүләп,
Көн-төнөн, ай-йыл һанап,
Һаман алға киткән, ти;
Бара торғас, бер заман
Бер йылғаның ситендә,
Бер ҙур ағас төбөндә,
Ҙур таяғы ҡулында
Аҡ һаҡаллы бер ҡартҡа
Былар барып еткән, ти,
Барып сәләм биргән, ти.
Ҡарт та ҡаршы алған, ти,
Быларға күҙ йөрөтөп,
Ике юлды күрһәтеп,
Былай тиеп әйткән, ти:
"Бына һеҙгә ике юл:
Һулға китһәң, юл буйы -
Уйын-көлкө төн буйы,
Уңға китһәң, юл буйы -
Илау-һыҡтау йыл буйы;
Яуызлыҡта дан алған,
Батшаһынан, башҡаһынан
Ҡайғы, этлек күреүсе,
Ҡанлы йөшен түгеүсе
Ҡатил батша иле бар;
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар".

**Арыҫлан йондоҙлоғо**
**Август**

Ҡарт шунда уҡ Шүлгән менән Уралға, ҡоштар ҡарап осҡан яҡҡа табан күҙ яҙмай китергә, арттарынан күҙәтеп барып, Йәншишмәнең урынын табырға, әгәр юлда Үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡушҡан. Ике улын ике арыҫланға мендереп оҙатҡан, ти.




**Ҡыҙ йондоҙлоғо**
**Сентябрь**

Алтын тәхет өҫтөндә
Батша ҡыҙы ултырған,
Дүрт яғынан дүрт ҡоло
Тәхетене күтәргән,
Баҫмалатып артынан,
Бер яраны эйәргән,
Бынығы үҙе артынан
Ҡалғандарын эйәрткән.
Килеп еткәс, ти, былар:
"Тигеҙ, яҡшы тороғоҙ,
Батша ҡыҙы килә бит,
Яҡты йөҙлө булығыҙ!" -
Тип бирәүһе әйткән, ти.
Сафты боҙоп торғанды
Ҡамсы менән һуҡҡан, ти.
Батша ҡыҙы шул саҡта
Килеп еткән майҙанға;
Урал да рәт боҙмаған,
Баҫып торған ыңғайға;
Батша ҡыҙы, аралап,
Бар егетте һайлаған,
Араһынан оҡшарҙай
Бер егет тә тапмаған.
Аҙаҡ сиктә, яҡынлап,
Уралға килеп еткән, ти...

# КАЛЕНДАРЫ







**Буға йондоҙлоғо**
**Октябрь**

Урал быға күнмәгән,
Һарайға ул китмәгән (...)
Асыуланып, шул саҡта
Ҡыҙы килеп еткән, ти,
Урал янына үткән, ти,
Үпкә һүҙен әйткән, ти:
"Егет, һине һайланым,
Һарайыма барманың,
Алма биреп ымланым,
Мине тиңгә алманың;
Кире ҡаҡтың һүҙемде,
Бөтә ҡолдар алдында
Ҡара иттең йөҙөмдө", -
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Батша төшкән тәхеттән: (...)
" (...) Һарайымды күтәргән
Үгеҙемде килтерең;
Үгеҙ ҡылыр ҡылыҡты,
Һеҙ батырҙар, тик тороң".






**Кәзәмөгөҙ йондоҙлоғо**
**Декабрь**

Ғәләмәт ҙур бер йылан
Ҡулҡы эсенән һеҙеп,
Тотоп алған бер болан.
Ай, айҡаша, ти, былар,
Һай, сайҡаша, ти, былар;
Аҙаҡ сиктә түҙәлмәй,
Йыланға ҡаршы торалмай,
Сәсәп, йығылған болан,
Арт һанынан боландың
Шундуҡ ҡапҡан, ти, йылан.
Урал барған йүгереп;
Йылан ҡойроғон болғап,
Дулай, ти, ағас һындырып;
Уралды ла йоторға
Ҡойроҡ менән һуҡҡан, ти,
Урал урап йыландың
Ҡойроғонан тотҡан, ти,
"Ебәр һин боланды!" - тип,
Йыланға Урал әйткән, ти.

**Геркулес менән Гидра йондоҙлоҡтары**
**Ноябрь**




Бер саҡ һарай тирәһе:
Эреһе-вағы, төрлөһө -
Йылан килеп тулған, ти;
Төрлө һүҙҙәр булған, ти,
Урал тыңлап торған, ти.
Туғыҙ башлы бер йылан:
"Юҡ, был кеше батшаның
Серен алды улынан,
Вәғәҙә алды ҡулынан;
Быны батша йә үҙе,
Йә булмаһа мин йотам;
Батшабыҙҙың бар серен
Үҙ башымда мин тотам.
Батша уны ашамаҫ,
Улын яҡлап ҡотҡарғас,
Ашаһа ла, баш үсмәҫ.
Юҡҡа йыйылып тормағыҙ,
Ымһынышып йөрөмәгеҙ,
Һеҙгә теймәҫ - көтмәгеҙ", -
Тигәс, барыһы таралған.
Туғыҙ башлы ҙур йылан
Шул тирәлә уранған:
Ҡапҡаға яҡын килгән, ти,
Бер ҡыҙ теҫлө булған, ти,
Урал янына инеп,
Арбамаҡсы булған, ти,
Уралға ҡул һуҙған, ти.
Урал ҡулын ҡыҫҡан, ти,
Бармаҡтары осонан
Ҡаны бөреп сыҡҡан, ти;
Йылан түҙмәй ҡыҫыуҙан
Ут бөркмәк булған, ти;
Урал сәсеп ғәйрәтен,
Боғаҙынан алған, ти.

✓ *Мин халҡыбыҙҙың димселек йолаһын хуплайым. Ҡыҙ менән егетте таныштырырҙан алда иң тәүҙә ата-әсәһе, заты тикшерелгән, яусылар йәштәрҙең холҡо бер-береһенә тура килеү-килмәүен дә асыҡлаған.*



# БЕҘҘЕ ДИМЛӘП

## Димләп өйләндерергә

**Эш сәфәре менән республикаңың төрлө төбәктәренә юл төшкән саҡта өлгөлө ғаиләләр менән танышыуҙы ла маҡсат итеп ҡуябыҙ. Әбйәлил районында булғанда беҙгә Дәүләт ауылында йәшәүсе Ғәлиә һәм Мәүлит Фәттәховтарҙың ғаиләһе менән танышырға кәңәш иттеләр. Фәттәховтар ысынлап та беҙ күрергә, танышырға теләгән, гәзитебеҙ биттәрендә башҡаларға өлгө, фәһем алырлыҡ ғаилә итеп күрһәтерлек хужалар булып сыкты. Мәүлит Мостафа улы Әбйәлил районы хакимиәтенең халыкты социаль яҡлау бүлеге етәксеһе урынбаҫары, ә Ғәлиә Абдулла ҡыҙы Дәүләт ауыл мәҙәниәт йортоноң халыҡ театры режиссеры, урындағы ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булып эшләй. Уларҙың һәр көнө халыҡ араһында, халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, уларҙың проблемаларын хәл итеп үтә. Һөйләшеүебеҙҙең ғаилә, тәрбиә хаҡында ғына түгел, ә бөгөngө ауыл, ауыл кешеһенә бәйле мәсьәләләр тураһында барыуы ла аңлашылалыр шулай булғас.**

**▸ Һәр ғаиләнең үҙенең танышыу, ҡауышыу тарихы була. Һеҙҙең ғаиләнең барлыҡҡа килеүенә нимә этәргес булды, бер-берегеҙҙе тәү башлап ҡайҙа күрҙегеҙ?**

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Аҫҡарҙа комсомолдың район комитетында икенсе секретарь булып эшләп йөрөгән саҡ. Ул ваҡытта комсомолдың гөрләп торған мәле, ярыштар, төрлө бәйгеләр ойоштороп, янып-көйөп эшләйбеҙ. Мин шул саҡта районды 9-сы класс уҡыусыларын комсомол сафына алғанмын. Улар араһында Ғәлиә лә булған, әммә ул ваҡиғаны һәм шунда булаcаҡ ҡатынымды беренсе тапҡыр күргәнемде мин хәтерләмәйем. Ә яҙмышыбыҙҙы ҡапыл бороп ебәреүсе ваҡиға шулайыраҡ булды.

Шулай бер саҡ мине Калинин колхозының партком секретары итергә булып киттеләр. Ул саҡта район менән Фәйзрахман Шәйҙулла улы Хисмәтуллин етәкселек итә ине. Кабинетына саҡырып индерҙе лә, "Беҙ бына шулай уйлайбыҙ, ә һин нисек уйлайһың, Мәүлит ҡустым?" тип һораны. Ул саҡта партия ҡайҙа ҡуша, шунда эшкә китә инек бит, ризалаштым. "Тик бында бер мәсьәләне хәл итергә кәрәк бит әле, - ти Фәйзрахман Шәйҙулла улы. - Бығa тиклем партия ойошмаһы тарихында өйләнмәгән кешене парторг итеп ебәреү булманы, өйлән, давай". "Һеҙ ҡушҡас, өйләнәм инде", - тинем. Ишколда эшләй башлауыма айҙан артыҡ ваҡыт үтте, ярты йыл үтте, ә кәләш юҡ. Шунан районды партия комитетына беренсе секретарь булып эшкә минең ике туған ағайым Милләт Хәкимов килде. Ғаиләһеҙ кешенең халыҡ араһында ниндәй абруйы булһын да, уға кем ышанһын инде? Шуға ла етәкселәрҙең мине тиҙерәк өйләндергеләре килә. Ағайым мине шулай ҙа үҙенә саҡыртмай, ә был мәсьәләне хәл итеүҙе ойоштороу бүлеге мөдиренә ҡушҡан икән. Унының кабинетына саҡырта ла "Касан өйләнәһең?" тип һорай, саҡырта ла шул бер һорауҙы бирә. Өйләнермен әле, тием дә йөрөй бирәм. Шулай 7 ноябрь етте, һыуыҡ өйҙә бер үҙем йәшәп ятам. Ташбулатта партком секретары булып эшләгән бер туған ағайым Марат Юғары партия мәктәбендә уҡып йөрөй ине. Шул ағайым миңә телефондан шылтыратты. Беҙҙең арала ярым шаярыу ҡатыш һөйләшеү башланды: "Нимә эшләп ятаң?" "Тик ятам". "Күңелһеҙме?" "Күңелһеҙ". "Күңелһеҙ булһа, кәләш ал". "Алыр инем дә, кәләш юҡ". "Һаман тапманыңмы?" "Тапманым". "Тапмаһаң, иртәгә кил, үҙем табып бирәм". Ул бик ҡыйыу, мәсьәләне тиҙ генә хәл итергә яратҡан кеше ине. Шулай Ташбулатҡа киттем. Мине унда Ғәлиә менән таныштырҙылар.

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Мәүлиттең беҙҙе комсомолға алғанын яҡшы хәтерләйем. Мәктәпте тамамлағас, мин комсорг булып эшләй башланым. Шунан Мәүлит менән эш буйынса төрлө сараларҙа осрашырға тура килгеләне. Ул саҡта колхоз-совхоздар араһында төрлө ярыштар күп ойоштορола торғайны. Ноябрь байрамы алдынан үткәрелгән сарала мине Мәүлит менән таныштырҙылар. Бик һынап, баштан-аяҡ ҡарап ҡуйыуын һиҙгәйнем инде. Ағалары менән һөйләшкәндәр ҙә, бер нисә көндән ҡоҙа булып та килделәр. Бер тапҡыр ҙа һөйләшеп тә йөрөмәнек, вәғәҙәләр ҙә бирешмәнек. Минең туғандарым уның партком булып эшләгән ағаһын яҡшы белә, матур ғаиләнән, тип, риза булдылар. Ниңә 27 йәшкә тиклем кәләш алмай йөрөгән, ғаиләһе булманымы икән, тип бер аҙ икеләнгән булдым шулай ҙа. Етмәһә, уҡырға инергә хыялланып йөрөй инем. Ҡайҙа ул беҙҙән ризалыҡ һорап тороу! Атай-әсәйҙәр, туғандар үҙ-ара һөйләшеп хәл иттеләр ҙә, беҙ өйләнештек тә ҡуйҙыҡ. Боронғоса, ата-бабалар йолаһынса булды инде был.

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Мин халҡыбыҙҙың димселек йолаһын хуплайым һәм бик дөрөҫ тип иҫәпләйем. Ҡыҙ менән егетте таныштырырҙан алда иң тәүҙә ата-әсәһе, заты тикшерелгән, яусылар йәштәрҙең холҡо бер-береһенә тура килеү-килмәүен дә асыҡлаған. Ошо күркәм йоланың юҡҡа сығыуы ғаилә институты ҡиммәттәренең, йәштәр араһында әхлаҡ төшөнсәләренең яйлап юғалыуына килтерҙе лә инде. Шуға ла хәҙер димселекте кире тергеҙеү тураһында уйлана башларға кәрәктер.

**▸ Атай-әсәй һүҙенән ситкә тайпылмау тигән яҙылмаған ҡанун халҡыбыҙҙа көслө булған шул элек. Ғаиләлә бала тормоштоң был ҡанунын үҙләштерһен өсөн ниндәйерәк тәрбиә алырға тейеш һуң? Һеҙҙең үҙегеҙгә атай-әсәйегеҙ ниндәй тәрбиә бирҙе?**

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Ғаиләлә туғыҙ бала үҫтек. Һәр беребеҙгә әсәй, атай һүҙе закон була торғайны. Улар ҡушҡан эште эшләп, улар әйткәнде тыңлап үҫтек. Минеңсә, ата-әсә һүҙен йыҡмаһаң, тормошта ла, бар ерҙә лә уңышлы булырға мөмкин. Беҙ үҫкән заманда һәр ғаиләлә лә балаларҙы эшләтеп тәрбиәләйҙәр ине. Беҙҙең, мәҫәлән, йәшелсә баҡсаһы, унда һәр беребеҙҙең түтәле булды. Үҙ-ара ярышып эшләйбеҙ, атайым эштән ҡайтып, хеҙмәтебеҙҙе тикшереп, баһалай. Атайым аҡса тапты, ул кейендерҙе, ул ашатты, уның һүҙе лә һәр мәсьәләне хәл иткәндә иң һуңғыһы булды. Халыҡта "Атай - ул Тәңре" тигән мәҡәл бар. Беҙ үҫкән саҡта һәр ғаиләлә атай кеше Тәңре юғарылығына күтәрелеп баһалана ине.

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Мин дә биш малай һәм бер ҡыҙ тәрбиәләнгән күп балалы ғаиләлә үҫтем. Беҙ үҫкәндә ғаиләлә балалар күп булыуы ғәҙәти күренеш һанала ине. Бер-беребеҙгә ярҙам итешеп йәшәү бәләкәй саҡтан ҡанға һеңгән. Атай ғүмер буйына етәксе урындарҙа эшләне. Һуғыштан алда 16 йәшлек атайымды Буранғолдағы колхозға рәйес итеп ҡуялар. Бармайым, ундағы ағай-апайҙарға нисек эш ҡушам мин, тип, көнө буйы илап ята ул. Өләсәйем, яҙыу-һыҙыуҙы беләһең, саҡырғастар, бар, һорашырһың, өйрәнерһең, тип әүрәтеп, фатиханын биреп ебәрә. Һуғышҡа һуң ғына китә атайым һәм фронт штабында эшләй. Һуғыштан ҡайтҡас, ғүмеренең ахырына тиклем төрлө урындарҙа етәксе булып эшләне. Донъянан ҡапыл ғына, 50 йәше лә тулмайынса китеп барыуы йөрәк сиренән булды. Ә әсәйем һуғыш мәлендә мәктәптә уҡытып йөрөһә лә, аҙаҡ өйҙә ултырҙы, йортто, балаларҙы ҡараны. Атай эштә булды, балаларҙы күберәк әсәй тәрбиәләне. Атайҙан ҡурҡып торола ине. Әсәйемдән: "Атайың белеп ҡалһа",- тигән һүҙенең беҙгә тәьсире шул тиклем көслө була торғайны. Атайым беҙҙең уҡып, юғары белем алыуыбыҙҙы нык теләй ине. Алтауыбыҙҙың да юғары белеме бар, ҡайһыларыбыҙ икешәр институт тамамланы.

**▸ Нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, бөгөнгө гүзәл зат үҙенең ҡатын-ҡыҙ бурыстарынан ситләште, ир-егетте көй-**



*Ғаилә тормошона, мөнәсәбәттәргә фәйләсуфтәрсә ҡарайым. Атайым менән әсәйемдең дә ваҡ-төйәккә артыҡ иғтибар биреп, бәләкәй проблеманы ҙурайтып ебәреү ғәҙәте булманы, беҙ ҙә шулай. Ғәҙәттә, ир менән ҡатын, ҡунаҡҡа барһа, береһе икенсеһен, башлыса ҡатыны ирен төрлөсә тыя, тәрткөләй башлай. Ә беҙ ундай урындарҙа төрлө уйындар, йыр-бейеүҙәр ойоштороп, ҡунаҡтарҙың күңелен асырға яратабыҙ һәм шуға ла бер-беребеҙгә бәйләнергә ваҡытыбыҙ ҙа юҡ, хатта бер-беребеҙҙе күрмәйбеҙ ҙә.*

*✓ Әлбиттә, эсмәгән, тартмаған, ғаиләһен сит һуҙҙәрҙән һәм күҙҙәрҙән ҡурсалап ҡына торған ир менән йәшәүе еңел миңә, шуға ла уның күңелен күтәреп ебәрергә тырышам, гел маҡтап ҡына торам.*



**ләй ҙә белмәй, аңларға ла теләмәй, сөнки ғаиләлә ҡыҙҙарҙы ҡатын-ҡыҙ итеп тәрбиәләмәйҙәр. Һеҙҙең атайығыҙ һәм әсәйегеҙ араһындағы мөнәсәбәт ниндәй ине?**

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Боронғоларҙың "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын" тигән аҡылы бар. Иманым камил, ҡәйнәм дә, әсәйем дә быны яҡшы белгән һәм шуға ла уларҙың ғаиләһе лә өлгөлө булған. Ҡатын кеше ирен күтәрә белһә, ғаиләлә балалар алдында уның абруйы ла ҙур була. Атай абруйы, уның гүзәл һүҙе, ҡаты ҡулы ғына балаларҙы тәрбиәләй ала. Әлбиттә, хәҙер ир һәм ҡатын араһындағы мөнәсәбәт, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ психологияһына арналған, төрлө кәңәштәр биргән әсбаптар менән китап магазиндары тулған, әммә шулай булыуға ҡарамаҫтан, төрлө реһе икенсеһен, башлыса ҡатыны ирен төрлөсә тыя, төрткөләй башлай. Ә беҙ ундай урындарҙа төрлө уйындар, йыр-бейеүҙәр ойоштороп, ҡунаҡтарҙың күңелен асырға яратабыҙ һәм шуға ла бер-беребеҙгә бәйләнергә ваҡытыбыҙ ҙа юҡ, хатта бер-беребеҙҙе күрмәйбеҙ ҙә.

**▸ Башҡа милләттәр араһында бер бөртөк туғанһыҙ кешеләр бар. Ә беҙҙең халыҡта туғандар менән тығыҙ аралашып йәшәү йолаһы һаҡланған. Һеҙ ҙә ҙур нәҫелле кешеләр, үҙ-ара аралашып йәшәргә, балаларығыҙҙа туғанлыҡ хисе уятырға тырышаһығыҙмы?**

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Ике яҡтан да зат-ырыуыбыҙ шул тиклем үҙ-ара татыу, ә бажаларым менән мин ҡан туғандарға ҡарағанда ла яҡыныраҡмын.

**Бөгөнгө ауыл ысынлап та ярҙамға мохтажмы? Уға нисек йәнлелек индерергә?**

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Бөгөн ауылды йәнләндереп, уятып ебәреүҙең берҙән-бер ысулы - элекке кеүек, ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүсе ойошмалар булдырыу. Эшһеҙ кешеләр шул тиклем күп, районың ҡайһы бер ауылдарында эшһеҙҙәр һаны 100-ҙән ашып китә. Бөтә йәмһеҙ күренештәр: ғаиләләрҙәге ыҙғыштар, эскелек, урлашыу, балаларҙың тейешле тәрбиә алмауы һәм башҡаларҙың нигеҙендә тап эшһеҙлек ята ла инде. Әлбиттә, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә байрамы" ойоштороу ауылдарҙы тәҙәкләндерергә, кешеләрҙең күңелен күтәреп ебәрергә ярҙам итеүсе саралар, шулай ҙа халыҡты эш менән тәьмин итмәйенсә, ауылдарҙың про-

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Дәүләт ярҙамы менән "Газель" машиналары алып, үҙ эшен асып ебәреүселәр бар хәҙер. Йәғни, теләге булған кеше эйәһен табып, аҡса эшләй ала. Ауыл ерендә эш бөтәме һуң? Утын ҡырҡып, бесән сабып һат, яҙлы-көҙлө ер һөр, мал көт. Дәүләт ярҙамынан тыш тырышып донъя көтөүселәр бар. Бына беҙҙең урамда ғына көтөүгә туғыҙ-ун баш эре мал ҡыуыусылар бар. Тик барыһы ла улай түгел шул, кешене уятыу кәрәк.

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Тәбиғәтебеҙ шул тиклем бай, мәҫәлән, беҙҙә йәшмә күп, уны эшкәртергә мөмкин. Йылғыраҡтар ҡом һатып та аҡса эшләй. Балыҡ алып барып һат Магнитогорскиға - дәүләт эшендә йөрөүсенән кәм аҡса алмаясаҡһың. Ауыл ерендә һәр бер өйгә бер һөнәр бүлеп алырға була хатта. Бынлош үҙгәреп, бер-бер артлы сәйәси һайлауҙар тулҡыны башланғас, халыҡты таратып бөттөк тә, уларҙы хәҙер бер нисек тә кире туплай алмайбыҙ. Йәмғиәтебеҙҙәге һәр кеше, элекке кеүек, бер-береһенә ярҙам итеп, бер-береһенә файҙа килтереп йәшәй башламайынса, алға китеш булмаҫ, ахыры, ә бының өсөн күпмелер ваҡыт үтеүе кәрәк.

**▸ Районың ҡатын-ҡыҙҙар советтары халыҡты, бигерәк тә донъя тотҡаһы булған ҡатын-ҡыҙҙарҙы дөрөҫ юлға баҫтырыу йәһәтенән күп эш башҡарғаны тураһында ишетеп беләбеҙ. Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзаларына күберәк ниндәйерәк проблемаларҙы хәл итергә тура килә?**

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Беҙҙең ауыл советына дүрт ау-

# Өйләндерҙеләр...

## кәрәк йәштәрҙе

сәбәптәр арҡаһында тарҡалыусы ғаиләләр һаны кәмемәй, киреһенсә, арта ғына. Беҙҙең өләсәйҙәр был аҡылдарҙың барыһын да белгән, әммә был турала беҙҙе махсус ултыртып, һөйләп ултырманылар. Барыһы ла эш араһында, барыһы ла башҡа төрлө ваҡиғаға бәйле аңлатыла ине, ғаиләлә ир һәм ҡатын араһындағы мөнәсәбәт ниндәй булырға тейешлеген дә атай һәм әсәйҙе күҙәтә йөрөп кенә төшөнгәнбеҙҙер ул. Бөгөн ҡыҙҙарым, ысын ирегет атайым кеүек булырға тейеш, тип уйлай икән, был һығымтаға улар күҙәтеүҙәр арҡамында килә, мин был турала уларға әйтеп торғаным юҡ.

Эштән һуңлап ҡайтҡан иремде "Ҡайҙа йөрөнөң?" тип ҡаршы алмайым, ә "Ҡалай оҙаҡланың", тием. Бергә ултырып ашарға күнеккәнбеҙ, шул арала килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итергә өлгөрәбеҙ. Әлбиттә, эсмәгән, тартмаған, ғаиләһен сит һуҙҙәрҙән һәм күҙҙәрҙән ҡурсалап ҡына торған ир менән йәшәүе еңел миңә, шуға ла уның күңелен күтәреп ебәрергә тырышам, үҙенең кәрәклеген тойһон өсөн гел маҡтап ҡына торам.

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Донъя көткәс, өйҙә һауыт-һаба була, һауыт-һаба булғас, ул шалтырамайынса тормай. Ҡайһы саҡта Ғәлиәне өйрәтеп тә алырға тура килә килеүгә, ни тиһәң дә, мин бит унан өлкәнерәк. Ғөмүмән, ғаилә тормошона, мөнәсәбәттәргә фәйләсүфтәрсә ҡарайым. Атайым менән әсәйемдең дә ваҡтөккә артыҡ иғтибар биреп, бәләкәй проблеманы ҙурайтып ебәреү ғәҙәте булманы, беҙ ҙә шулай. Ғәҙәттә, ир менән ҡатын, ҡунаҡҡа барһа, бе-

раҡмын. Туйҙар, байрамдар тик туғандар менән генә үтә, хатта ике яҡтан бер туғандарҙы ғына саҡырһаҡ та, йөҙҙән ашыу булып китәбеҙ. Мөмкинлегебеҙгә ҡарап, матди яҡтан да бер-беребеҙгә ярҙам итергә тырышабыҙ.

**ҒӘЛИӘ АБДУЛЛА ҡыҙы:** Туғандар тигәс, ҡәйнәмдең әйткән һүҙе иҫкә төштө әле. Кеҫәгеҙҙә аҡсағыҙ булмаһа ла, һуңғы тинегеҙгә туйға барығыҙ, тигәйне ул. Быны күңел асырға яратыу тип түгел, ә туғандарға ярҙам итеү, тип аңларға кәрәк. Саҡ ҡына кәңәш, ярҙам һорап килмәй торһалар, онотоп киттеләр, тип борсола башлайым хатта. Балаларыбыҙ ошо туғанлыҡ хистәрен күреп үҫкәс, үҙ-ара ғына түгел, ике, өс, дүрт туғандар менән йөрөшөп, ҡатышып йәшәйҙәр. Беҙҙең балалар өсөһө лә Өфөлә, Даян улыбыҙҙың үҙенең ғаиләһе бар, Раушания ҡыҙыбыҙ эшләп йөрөй, Гүзәлиә уҡый. Киленебеҙ ҙә үҙебеҙ һымаҡ, туғандар, тип өҙөлөп тора. Килен алғас, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар барлыҡҡа килде бит инде. Уларҙы ла бер туған кеүек итеп ҡабул иттек.

**МӘҮЛИТ МОСТАФА улы:** Туғандар менән аралашҡанда ғаиләбеҙҙең матур традициялары тағы ла нығына төшә, уларҙы балаларыбыҙ күреп үҫә. Башҡорт аштары әҙерләп, милли йолалар башҡарып, ҡурай тартып, йырҙар йырлап ултырып алыу үҙе бер ғүмер.

**▸ Элек гөрләп торған ауылдар бөгөн ниндәйҙер рухи көрсөк кисергән кеүек. Ауылдарҙы эшһеҙлек, эскелек кеүек заман афәттәренән ҡотҡарырға кәрәк, тигән һүҙҙәрҙе лә йыш һөйләй башланыҡ.**

блемаларын хәл итә алмаясаҡбыҙ. Булғанды емереп бөттөк, ә ваҡытында күтәрә белмәгәс һәм дәүләттән тейешле ярҙам күрмәгәс, бәләкәй эшҡыуарлыҡ һаман тейешенсә үҫешә алмай. Колхоз-совхоздарҙы ҡапыл бөтөрөү хата булды һәм бойороҡ менән генә эшләп өйрәнгән халыҡ һаман да яңы шарттарға күнегеп китә алмай. Бөгөнгө көндә үҙ эшен асырға теләгән кешегә лә хөкүмәт тейешенсә ярҙам итә алмай, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ярай, ауылдың ике-өс кешеһе фермер булып китте, ти, уларҙың бит тотош ауылды эш менән тәьмин итеү мөмкинлеге юҡ. Шәхси хужалығында мал үрсетеп, аҡса эшләү ҙә ауырға төшә ҡайсаҡ. Беҙгә, әбйәлилдәргә, был йәһәттән еңелерәк, сөнки ит-майҙы алып барып һатыу өсөн эргәбеҙҙә Магнитогорск һәм Белорет ҡалалары бар. Ә бөрйәндәр, хәйбуллалар нимә эшләргә тейеш?

Кешене беҙ етмеш йыл буйына тегендә баҫма, бында баҫ, тип өйрәтеп, ундағы үҙ аллы фекерләү сифатын, яуаплылыҡ тойғоһон юҡҡа сығарҙыҡ. Ололарҙың хәтерендәләр, 1961 йылда Хрущев ауыл хужалығында эшләүселәрҙең минималь эш хаҡы тураһында ҡарар сығарҙы. Ҡарар буйынса, ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәренең эш хаҡы 60 һумдан артырға тейеш түгел ине. Шул саҡтан алып эшләгәненә лә, эшләмәгәненә лә, тырышына ла, ялҡауына ла бер тигеҙ эш хаҡы түләнде. Шуның менән беҙ тырышты тыйып торҙоҡ, ялҡауҙы артыбыҙҙан һөйрәтеп алып йөрөп, аҡса түләнек. Кеше шуға өйрәнде лә. Шуға ла бөгөн йәштәр комитеттарына әүҙемерәк эшләргә, инициативалы йәштәргә төрлө дәүләт ярҙамы алырға ярҙам итергә кәрәк.

дай башланғыстар бар ул, тик шулай ҙа халыҡты коллектив эшкә йәлеп итә торған нимәлер ойоштороу зарур.

Үлгән һыйыр һөтлө була, тип шаяртырға ярата ҡа, совет замандағы система, партия кешене ҡатыраҡ тотто һәм һеҙөмтәлә тәртип боҙоп йөрөүселәр булманы ла тиерлек. Эшһеҙ бер ай ятып ҡара, шунда уҡ енәйәт эше ҡуҙғаталар ине. Иғтибар итегеҙ: административ түгел, ә енәйәт эше! Уҡып бөткән йәш белгескә шунда уҡ йәшәргә торлаҡ та бирер инеләр. Ә бөгөн күпме йәш кеше сит кешеләр тупһаһын тапарға мәжбүр. Бөгөн дәүләт халыҡҡа шәхси эш асһын өсөн аҡса таратты, ти, ул уны йә эсеп бөтөрәсәк, йә нимә эшләтергә белмәйенсә аптыраясаҡ. Сөнки әлеге лә баяғы, эште яйлаусы һәм тәғәрмәсте урынынан ҡуҙғатып ебәреүсе система, структура уйлап сығарылмаған. Көн һайын район хакимиәтендә йыйылыш булып тора, киләләр, һөйләшәләр, кире ҡайтып китәләр. Ирекһеҙҙән, Михаил Жванецкийҙың һүҙҙәре иҫкә төшә: "Бөгөн бар халыҡ та нимә менәндер мәшғүл: барыһы ла йүгерә, ундабында саба, бәрәү ҙә бушамай. Бәхтиһән, хәҙер иң мөһиме һөҙөмтә түгел, ә хәрәкәт икән". Бөгөнгө илдәге хәлде ошонан да яҡшыраҡ итеп ҡылыҡһырлап булмай.

Соломондың яратҡан бер әйтеме булған: "Барыһы ла үтә, бының да үтер". Шуға күрә, барыһын да ваҡыт үҙ урынына ҡуясаҡ. Шуға ла бөгөн беҙгә һәүетемсә генә ғүмер кисереүҙе дауам итергә, закондарҙы камиллаштырырға, урындарҙағы властың, ауыл хакимиәттәренең эшен әүҙемләштерергә кәрәк. Ҡасандыр колхоз рәйесе халыҡ өсөн батша ине. Илдәге ҡоро-

ыл: Яңауыл, Селиван, Дәүләт, Ҡушый ҡарай. 11 йыл ошо эш менән шөғөлләнгән кеше булараҡ, шуны әйтә алам: бынан ун йыл элекке менән сағыштырғанда, бөгөн проблемалы ғаиләләр һаны бермә-бер кәмене. Аллаға шөкөр, атайҙар эшләргә тырыша, әсәйҙәр донъя көтә, балалар ҡараулы. Әлбиттә, төрлө хәлдәр килеп тыуғылай, шулай ҙа ауыр ғаиләләр бармаҡ менән генә иҫәпләрлек. Кеше, бигерәк тә гүзәл зат, нимә эсә башлай? Сөнки уны аңламайҙар, уның һөйләшеп, эс серҙәрен бүлешеүсе кешеһе юҡ. Әгәр ҙә уның менән ултырып һөйләшһәң, дөрөҫ юл күрһәтһәң, улар йүнәлеп китә. Матур ғаиләләрҙе күтәрергә тырышабыҙ, клуб, китапхана хеҙмәткәрҙәре менән төрлө саралар үткәрәбеҙ, сөнки ауыл кешеһе яҡшы ғаиләләргә ҡарап, һабаҡ алып ҡына ҡалмай, үҙе лә шулай йәшәргә ынтыла башлай. Халыҡ матур күңелле ул беҙҙә, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Халыҡ театры ҡуйған спектаклдәргә лә иң тәүҙә ситтә эшләп йөрөүсе ауылдаштарыбыҙҙы йәлеп итергә, уларҙы ауыл тормошо менән дә ҡайнатып йәшәтергә тырышабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаилә тормошоноң бәхете һәм бөтөнлөгө ирҙең дә, ҡатындың да булмышынан, зирәклегенән, бер-береһен аңлай белеп йәшәү оҫталығынан тора, тиҙәр. Был ысынлап та шулайҙыр. Һәр хәлдә, Ғәлиә һәм Мәүлит Фәттәховтар, беҙҙе партия өйләндерҙе, тип шаяртырға яратһа ла, тап ошо сифаттары көндәлек ғаилә тормошон бер-береһе өсөн байрамға әүерелдерергә ярҙам итәләр ул.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
әңгәмә ҡорҙо.

БАШ ҺҮҘ

# РӘШИТ ӘХТӘРОВ - Бодонөй Башҡорттоң һуңғы Олуғ Ҡаңбабаһы...

**Үткән быуаттың 90-сы йылдар башы. Тантаналы Өфө урамдары. Яҙыусылар союзында, "Аҡ тирмә" клубында үткән тулҡынландырғыс кисәләр. Ҡаланың төрлө майҙандарында үткән шиғриәт байрамдары. Сәсәндәр әйтеше. Ошондай сараларҙың барыһында ла тиерлек сибек кенә оҙон буйлы ағай сәхнәгә сығып, илһамланып китеп шиғыр уҡый, ҡобайыр әйтә. Уның шиғри һүҙҙәрен, ундағы кинәйәләрҙе беҙ аңлап та бөтөрмәйбеҙ. Шулай ҙа милли рухыбыҙ, тарихыбыҙ хаҡында ошондай ҡанатлы һүҙҙәр һөйләүсенең ниндәй тойғолар кисергәнен аңлауы ҡыйын түгел. Ул ҡасандыр органдар тарафынан миллəтсе тип "ҡыуылып" ауылға китеп, баш ҡалаға кире әйләнеп ҡайтып, ошо рәүешле, үҙ инанысының, хыялдарының ысынға сығыуын тантана итә.**

Беҙ уны, ағайҙарға эйәреп, үҙ исеме менән түгел, ниңәлер, бығаса ишетмәгән һүҙ менән атап йөрөтәбеҙ: Ҡанбаба. Һуңынан ҡунаҡхана бүлмәләрендә, студент ятаҡтарында уның менән осрашып: "Кем ул Ҡанбаба?" - тип һорайбыҙ. Ул тауышын әллә ни күтәрмәйенсә, әммә әйтер һүҙен әйтеп өлгөрмәүҙән ҡурҡҡан кеүек шәп тиҙлектә һөйләргә тотона. Һүҙҙәренә, унда килтерелгән факттарға, фекерҙәргә зиһен өлгөрмәҫлек телмәр. Әңгәмәсебеҙ беҙгә боронғо тарих һөйләй. Халҡыбыҙҙың иң боронғо тарихын. Ул бер ниндәй ҙә яҙма сығанаҡҡа таянмайынса, әммә бер үк һүҙҙәрен, фекерҙәрен, факттарҙы ҡабатламайынса, сәғәттәр буйына һөйләй ҙә һөйләй. Алда ултырған сәйҙәр һыуынып, шараптарҙың градустары осоп бөтә, төн уртаһы, таң етә, көн төшлөккә ауыша. Икенсе юлы осрашҡанда тағы ла шул уҡ хәл ҡабатлана: был юлы инде ағай алда һөйләгәндәрен ҡабатламайынса, элекке фекерҙәрен фекергә ялғап алып китә. Беҙ, егеттәр, аптырашта ахылдашабыҙ: ҡайҙан, ниндәй сығанаҡтан ала һуң был ағай шундайын, бер ерҙә лә булмаған мәғлүмәтте? Үҙенән ошо хаҡта һорайбыҙ. Ә ул бер ни булмағандай: "Был мәғлүмәт бер ерҙә лә юҡ, минә уларҙы мираҫ итеп ҡалдырҙылар", ти. "Кемдәр ҡалдырҙы?" тип тағы ла һорайбыҙ. Ул: "Ҡанбабалар", - тип яуаплай. Тағы ла теге ҡулсаның осона - Ҡанбабаларға барып сығабыҙ. Рәшит Әхтәри ағай артабан телмәрен дауам итә: "Ҡанбабалар - миллəттең тулы ҡанлы тормошон тәьмин иткән, шәжәрә төҙөгән, ҡан яңыртҡан, ҡаңбабалар - миллəт уҡытыусылары булған..."

Ул һөйләгәндәрҙән сығып, һуңынан Ҡанбабалар (урыҫтарҙа - жрецтар) хаҡында уйлана башланым. Улар - миллəттең тулы ҡанлы йәшәүен тәьмин итеүселәр. Хәҙерге заманса әйткәндә, илде, миллəтте тәрбиәләүсе, һауыҡтырыусы мәғариф, медицина тармаҡтары булып сыға. Тимәк, Ҡанбабалар революцияға тиклем миллəт өсөн мәғариф һәм медицина министрлыҡтары вазифаһын үтәгән. 1994 йылда "Шоңҡар" журналы ойоштороусы, уның тәүге һандарына уҡ Рәшит ағайға заказ биреп, "Ҡанбаба. Башҡорттоң исламғаса үткәне" тигән мәҡәлә яҙҙырып баҫтырҙыҡ. Артабан яҙыусы Булат Рафиҡовтан был мәктәп хаҡында һорашып, урыҫтарҙың жрецтары хаҡында махсус өйрәнеп, үҙем дә мәҡәлә яҙҙым һәм "Йәшлек" гәзитендә баҫтырҙым. Рәшит ағай был мәҡәләне уҡып, минә яуап итеп Ҡанбабалар мәктәбе хаҡында мәҡәлә яҙырға булған икән. Дөрөҫөрәге, ул мәҡәләһен яҙа башлаған, әммә уны тамамларға ғүмере етмәгән булып сыҡты. Был һандағы "Канбабалар мәктәбе" тигән яҙма - тап шул яҙып бөтөлмәгән мәҡәлә.

1996 йылда шағир Рәшит Әхтәри донъялыҡтан китеп барҙы. "Кил, Әхмәр туғаным, кил. Һинә һөйләй торған серҙәрем бар, халҡыбыҙ сер итеп кенә һаҡлаған әжелдән дарыу үләндәрҙе танырға өйрәтермен...", - тип мине саҡырып хат та яҙҙы ул. Бәхтиһән, ул күптәрҙе саҡырып ятҡан икән. "Үлем түшәгендә ятам", тигән яҙмаһы шул хаҡта. Үкенес. Оло үкенес, үҙе иҫән сағында янына барып булманы. Үлер алдынан Рәйсә еңгәйгә ҡайһы бер яҙмаларын минә аманат итеп тапшырырға ҡушҡан Рәшит ағай.

Бик һуңлап булһа ла, Рәшит Әхтәриҙең тыуыуына 80 йыл тулған көндәрҙә, уның ҡайһы бер яҙмаларын, Рәйсә еңгәйҙең уның хаҡындағы хәтирәһен, бер шәлкем шиғырҙарын һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итергә булдыҡ. Рәйсә Әхтәрованың "Башы лыҡа тулы хазина ине" тигән мәҡәләһендә беҙ Рәшит ағайҙың үҙебеҙгә мәғлүм булмаған башҡа күп сифаттарын астыҡ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# БАШЫ ЛЫҠА ТУЛЫ

## Баласағы

Ирем Рәшит Минһаж улы Әхтәров 1931 йылдың 6 ғинуарында Мәсетле районының Ишәле ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа. Уның ҡартнәһе (өләсәһе) Бибикамал Әбдрәхим ауылынан, ҡайҙа ғына барһа ла Рәшитте үҙе менән йөрөткән. Өйҙәме, тәбиғәт ҡосағындамы, урманға япраҡ бәйләргә барһынмы, дарыу үләндәре йыйһынмы - бәләкәй арбаға егелеп, кескәй Рәшитте ултыртҡан да, ҡолаҡына һендерә килеп, әкиәт-ҡобайырҙарын һөйләп йөрөр булған. Рәшит ғүмере буйы өләсәһенә рәхмәтле булды. Өләсәһенең ун дүрт балаһы булып, аслыҡ йылында уларҙан Рәшиттең атаһы Минһаж ҡайным ғына иҫән ҡала. "Балаларым ас көйө әкиәт тыңлай-тыңлай үлеп бөттөләр", тип һөйләгән ул. Аслыҡтан шешенгән балаларын нисек булһа ла йыуатырға теләгәндер инде ҡәйнәм. Минһаж ҡайным Бөйөк Ватан һуғышына китеп, Сталинград янында һәләк була.

Рәшиттең әсәһе Зәйтүнә ҡәйнәм Өфөләге атаҡлы "Ғәлиә", аҙаҡ Троицкиҙағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәләрендә уҡып ҡайтып, Ҡөрьән-Хафиза була. Ул Аҡа ауылынан килен булып төшкән. Аҙаҡтан Рәшиттең атаһы ғаиләһе менән күсенеп, Әбйәлил районының Яйҡар, Йәлембәт ауылдарында уҡытыусы булып эшләй.

Әхтәриҙең баласаһы юҡсыллыҡта үтә. Аслы-туҡлы булыуына ҡарамаҫтан, 60 саҡрым ергә, Ишәленән Ләмәҙгә аҙна һайын йәйәү йөрөп уҡып, урта мәктәпте тик яҡшы билдәләргә генә тамамлай. Бер үк ваҡытта айына унар көн фермала эшләп уҡый, сөнки эшләгән өсөн 4 кило он бирәләр.

Мәктәптә уҡыған сағында ул математиканан бик көслө булған. Контроль эштәрҙе беренсе булып үтәгән, өҫтәүенә, мәсьәлә-күнегеүҙәрҙе уҡытыусы өйрәтмәгән юлдар менән дә сискән. Хәлилов фамилиялы математика уҡытыусыһы, балалар һораша башлаһа: "Ана, Рәшит нисек иҫәпләгән, шулай дөрөҫ булыр",- тигән. Һуңынан уның әҙәбиәт юлынан китеүен белмәүселәр: "Һин математик түгелме һуң?" - тип һорашып булған. Армияла Рәшит артиллерияла наводчик булып хеҙмәт иткән. Әйткәндәй, Карелиялағы һуғыш хәрәкәттәрендә лә ҡатнашырға тура килә уға.

## Хәтере шәп булды уның

Рәшит Әхтәри үҙенең ете быуынын, "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарын яттан белде. Буласаҡ шағир атаһы Минһаждан, олатаһы Әхтәрҙән мәшһүр "Уҙаҡ менән Туҙаҡ - Балабәшнәк ярсығы" эпосын ятҡа өйрәнеп, күңеленә һендереп ҡала. Ошо ҡиммәтле әҫәрҙе Ниғмәт Шоңҡаровҡа магнитофон таҫмаһына һөйләп яҙҙыра. Был эпос ғалим Мөхтәр Сәғитов ҡулына эләгеп, тейешле баһаһын алды. Ошо әҫәрҙе донъяға танытыу өсөн ғалим 1986 йыл июнендә Төркиәнең Измир ҡалаһында уҙғарылған Бөтә донъя төрки халыҡтары конгресына барҙы. Был әҫәр "Башҡорт халыҡ ижады"ның 4-се томында баҫылған. Уның шулай уҡ "Башҡорт халыҡ ижады"ның 1-се томында шиғри юлдар менән яҙылған "Үгәй ҡыҙ" әкиәте баҫылды. "Әкиәттәр" томында иһә, һоҡланғыс матур йөкмәткеле "Ишәле менән Һоя","Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосына пародия рәүешендәге "Мыяубикә менән Сысҡанбай" әкиәттәре донъя күрҙе.

Халыҡ ижады ынйыларын берәмләп сүпләп, киләһе быуындарға еткереү сараһын күрҙе. Шуларҙан, мәҫәлән, итекселәрҙең уймаҡ фольклоры өлгөһөнән "Итек, ситек, энә, беҙ, йөҙ" сигеүселәр һамағы:

Күрһәткес бармаҡ - Ҡайыйым,
Урта бармаҡ - Байыйым,
Исемһеҙ бармаҡ - Ойойом,
Баш бармаҡ - Мин отҡо,
Сәнсә бармаҡ - Мин тотҡо.

Тегенсе, сигеүсе ҡыҙ-еңгәләр әйтеше:

Баш бармаҡ: "Сигәм дә сигәм";
Күрһәткес бармаҡ: "Сүгәм дә сүгәм";
Урта бармаҡ: "Тегәм дә тегәм";
Исемһеҙ бармаҡ: "Түгәм дә түгәм";
Бәпес бармаҡ: "Арағыҙҙа тик бер үҙем интегәм!"

## Нимәгә тотонһа ла...

Телсе, этимолог, тарихсы, балта оҫтаһы, артист, сәсән, шағир, үләндәр шифаһын, йондоҙҙар серен белеүсе, агроном, альпинист... Нимәгә тотонһа ла ҡулы килешле булды Рәшиттең. Башлағанды һәр ваҡыт осона алып барып сығарҙы. Күп кенә конкурс-бәйгеләрҙә еңеүгә өлгәште. Мәҫәлән, "Совет Башҡортостаны" гәзитендә ойошторолған "Иң яҡшы шиғыр" конкурсында "Ленин ораны" поэмаһы менән 1-се урынды яуланы. Иң яҡшы очерк яҙыу конкурсында яҡташыбыҙ Нәҡи Әмиров эшмәкәрлеген һүрәтләп, еңеп сыҡты.

Һәр бейеүҙең, вальстың төрөн айыра белде. Һәр бейеү хәрәкәтенең, һәр алымдың, хәрби дәрәжәләрҙең боронғоларын да, хәҙергеләрен дә, боронғо башҡорт атамаларының, һүҙҙәренең мәғәнәһен, килеп сығыу тарихын яҡшы белеп аңлатты. Йыл айҙарының башҡортса, исламғаса атамаларын ятҡа белде: һабанай - май, һөтай - июнь, аҡмайай - июль, урағай - август, һарысай - сентябрь, ҡарасай - октябрь, ҡырпағай - ноябрь, аҡыюлай - декабрь, һыуығай - ғинуар, шаҡай - февраль, буранай - март, алағарай - апрель.

Рәшит музейҙарға ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙе яҙма рәүештә тапшырҙы. Ул күрше районлар һәм өлкәләр музейҙарын барлап сыҡты, уларға күнәштәрен, мәғлүмәтен еткерҙе. Беҙҙең яҡтағы бөтә ҡоштар төрөн яҡшы белеүсе орнитолог та булды ул.

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Балта йәки салғы һаплау, күмгес (тәпке) хәстәрләү, бесәнлекте тәрбиәләү, бура бурау, мал оҫталау, ағас тырма, кәбән һалырға ос һәнәге эшләү булһынмы, барыһын да ысынъяһау итә ине. Миңә салғыны көйләп, тапап ҡына торҙо - сап ҡына. Еләк-емеш йыйырға ла әүәҫ булды. Төшмә, кисме -"һә" тигәнсе фуражкаһын тултырып еләген килтереп тә еткерә. Мин бер ваҡыт Ләмәҙгә, 20 саҡрым ергә еләккә киттем. Ике көндән арып-талып ҡайтыуыма ике биҙрә еләкте бер үҙе йыйып ултыртып та ҡуйған. Шартламаны таҙартырға ғына ҡалғайны. Ҡайҙан йыйғандыр?

Һаулығы булған саҡта бик етеҙ, егәрле ине. Шундай йылғыр - ботаҡһыҙ ағастарға йүгереп менеп китер ине. Шәп, йүгерек, етеҙ реакциялы, ғөмүмән, йәштән физик яҡтан әҙерлекле егет ине. Ул бер ваҡытта ла ҡурҡыуҙы белмәне. Һөйләүе буйынса, үҙен кескәйҙән шулай тәрбиәләгән. Төнөн ҡараңғы мунсаға инеүҙе, унда ултырыуҙы, хатта зыяратҡа төнөн барып, убыр утын ҡарауҙы мәҙәк күргән.

Ул ысын әртис тә ине. СССР-зың 50 йыллыҡ юбилейы хөрмәтенә Өфөлә үткәрелгән декадаға Мәсетле районынан үҙешмәкәр артистар менән Рәшит тә барҙы. Бик тә тәбиғи килеп сыҡты. Ул башҡорт еләнен кейеп, баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында районыбыҙ намыҫын яҡланы, бәҫен күтәрҙе, лауреат исеменә лайыҡ булып ҡайтты. Өфөләге "Аҡ тирмә" йыйындарында, әйтештәрҙә, сәсәндәр ярыштарында ул һәр ваҡыт сәхнә уртаһында булды, 1990 йылда үткән сәсәндәр бәйгеһендә Гран-при уға тапшырылды. 1995 йыл ҡурайсы сәсәндәр, йырсылар көс һынашты, уның һөҙөмтәһе лә - Гран-при. Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы көндәрендә лә ул, әлбиттә, Өфөлә булды.

Белмәгән нәмәһе юҡ, тиҙәр халыҡта уҡымышлы кеше тураһында. Хрущев власка килгән дәүерҙә һәр журналист кеше ауыл хужалығын белергә тейеш була. Әхтәриҙең агрономик ғилемле булыуы шиғырҙарында сағылыш тапты. Ҡыҫҡа ҡараһа, барлыҡ йондоҙҙарҙы исеме менән танып белер ине. Ә ҡарашын ергә төшөрһә, бөтә төр үҫемлектәрҙе, дарыу үләндәрен, уларҙы йыйыу ваҡытын, әҙерләү ысулдарын, ҡайһы сиргә килешкәндәрен белде. Бәшмәктәрҙең дә ағыулыһын, ашарға яраҡлыһын айырҙы. Ҡыҫҡаһы, ул барлыҡ тәбиғи фәндәр буйынса энциклопедик ғилемгә эйә ине.

## Төплө белемле ине

Фольклорсы, этнограф, тарихсы, күп телдәр белеүсе, тәржемәсе, төплө белемле яҡшы уҡытыусы булды, дәрестәрҙе йәнле итеп алып барҙы. Темаларын уҡыусыларға аңлайышлы, асыҡ итеп, күргәҙмә әсбаптар ҡулланып, йәнле уйындар аша аңлатты. "Уҡытыусы - ул бер үк ваҡытта артист та" принцибынан сығып эш итте. Инглиз телен уҡытһынмы, башҡа фәндәнме - уҡыусылары күңеленә ғәм һендерә алды. Теләш мәктәбендә уҡытҡан сағында Рәзилә Низамова тигән студент ҡыҙ БДУнан ауылға былай тип хат яҙа: "Бигерәк тә беҙгә тарих фәненән уҡыу еңелгә төшә. Рәшит абый беҙгә күбеһен һөйләп аңлатҡайны инде". Дәреслектәр менән генә сикләнмәне ул, өҫтәмә белем дә бирҙе. Ул мәктәптә халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады ынйыларын йыйыусы ла, әҙәби түңәрәктәргә рух биреүсе лә - тел ғалимы, фольклорсы, этнограф ине.

Башҡорт, татар телдәренең бөтә диалекттарын, ошо халыҡтарҙың тарихын яҡшы белә ине. Уларҙан тыш башҡа төрки телдәрҙе лә, славян халыҡтары, инглиз телен белде, латин, ғәрәп телдәренең нигеҙен яҡшы төшөндә. Инглиз телендә сыҡҡан "Moskow news" ("Мәскәү яңылыҡтары") гәзитен алдырып уҡып барҙы, ундағы кроссвордтарҙы систе. Ғөмү-

мән, ниндәй телдә булһа ла, кроссвордтарҙы сисмәй ҡалманы.

Ул телеэфирҙа үҫмерҙәр өсөн пьесалар күрһәтә алған. Сәхнәләштерергә әҫәрҙәр, артистар, бейеүселәр һайлашҡан. Аҙаҡ органдар тарафынан эҙәрлекләнеп, күҙәтеүгә алынып, судһыҙ-ниһеҙ Өфөнән ҡыуылған. Тик намыҫына, халҡына тоғро булып ҡалды, юғалып ҡалманы.

Ул кешене рәнйетеп, алдап, талап йөрөмәне. Кешегә һәр ваҡыт киселекле, игтибарлы, кешелекле булды. Уның үҙ фекере, үҙ мөһөрө булды. Уның эшмәкәрлеген тиҙ генә яҙып та, һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел. Конкурс ойошторолғас, ул Башҡортостан Республикаһы флагы үрнәген дә ижад итте, гимнын да яҙҙы.

Ул юғары кимәлдәге тәржемәсе ине. Өфөлә эшләү дәүерендә уға һәр ваҡыт хөкүмәт, дәүләт кимәлендәге документтарҙы тәржемә итергә ышанып тапшыралар ине.



# ХАЗИНА ИНЕ

Мин ғүмеребеҙ буйы уның үҙен һәм күңелен дауалаусы булып оҙата килдем. Әгәр минең игтибар етмәһә, үҙенең һәм минең ныҡышмалылыҡ булмаһа, яман сирҙән операция эшләгәндән һуң 20 йылдан ашыу йәшәр инеме? Ул миңә: "Һин врачҡа тиң, тәжрибәң ҙур",-тиер ине.

Илен, телен, халҡын ҡурсалаусы ҡалҡанлы һалдат хәлендә баҫа ул күҙ алдыма. Телебеҙ тураһындағы шиғырҙары теҙмәһе ҙур: "Йыр теле", "Халыҡ ижады теле", "Ҡанат етлектергәндә","Тарих төбө телемдә", һ.б. Шуларҙан өҙөктәр:

Минең телдә йыһан бар,
Ижегендә аһаң бар,
Һөйөп баҡһаң, һәр һүҙендә
Ил гөрләтер илһам бар!

Йәки:

Башҡа телдә күкелдәшә торған
Үстермәгеҙ ете-ят бала.
Үҫтерегеҙ теле, еле башҡорт,
Салауатҡа саҡ һәм зат бала.

Суверенитет яулаған йылдарҙа атакаға күтәрелеүсе, юл күрһәтеүсе һалдатты ла көүҙәләндерә ине. Ошо дәүерҙә "Суверенлы Башҡортостан", "Королтайға ҡоро ҡыуанысым", "Ҡайт, ҡандашым, таңлашым!" һәм башҡа шиғырҙарын ҡойҙо. Күпме йырҙар, ҡобайырҙар, мәдхиә-мөнәжәттәр сығарып таҡмаҡланы, көйләне ул. Ҡыҫҡаһы, республикабыҙ үҙаллылыҡ яулауын инҡилап вәкиғаһылай күреп ҡаршылады ул.

Боронғо башҡорт музыка ҡоралдарын тергеҙергә ынтылыусы пропагандист та булды ул. Ошо йәһәттән "Думбыра" шиғырын яҙҙы:

Күп мең йылдар йәшәп килгән
Башҡорттоң думбыраһы.
Думбыраны оноҡандың
Хәтерен умыраһы.
Ай, думбыра, думбыра!
Уйландыра, уйҙыра,
Әйтешттәрҙә ҡобайырға
Талмаҫ ҡанат ҡуйҙыра.
Ай, думбыра, думбыра!
Уйҙан-уйға сумдыра.

### Үҙе өсөн йәшәмәне...

Рәшит Әхтәри шиғырҙарын уҡыуы ауырыраҡ, тигәнде ишеткән бар. Эйе, уның шиғырҙары тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә, грамоталы, тәрән ғилемле, йөрәккә осҡон һалырлыҡ. Әхтәри шиғырҙарын уҡығанда мин ҡайһы саҡта, тулҡын өҫтөндәге тапсыҡ шикелле, шиғыр бишегендә талғын ғына бәүелеү тойғоһо кисерәм. Беҙ Ләйлә менән Мәжнүн, Таһир менән Зөһрә булмаһаҡ та, ул миңә арнап алты шиғыр ижад иткән. Икебеҙ пар аттай егелеп, донъя йөгөн бергә һөйрәнек. Үн биш йыл оло йәштәге инәйемде бергә ҡараныҡ, ҡыҙыбыҙ Гөлсәсәк менән улыбыҙ Илшат яҙмыштарын хәстәрләргә тырыштыҡ.

Мәрхүмдең бермәмләп кенә сүпләп туплаған гәүһәрҙәре түгелеп, нәшриәт кәштәләрендә ятып, туҙып, бер өлөшө юғалды, күп хеҙмәттәрен башҡалар файҙаланып, дәрәжәләр алып бөттө. Өфөнән алыҫ булыу бәләнелер ҙә, бәлки, беҙҙең ныҡышмалылыҡ та етмәгәндер инде. Күп фольклорсы ғалимдар Рәшиттең хеҙмәттәрен файҙаланды, тик исемен генә сығарманылар. Үҙе иҫән ваҡытында башҡарған эштәренең тамсыһын да күрә алманы. Бөтә йөрәге менән уфтанып, әрнегән саҡтары бихисап булды. Ошондай ҙа шәхестең күҙ алдында шиңә барыуын бик ауыр кисерҙем. Башы лыҡа тулы хазина ине. Ҡайны ваҡыт китап уҡырға ваҡытым булмағанда, эш араһында: "Һинең уҡырға ваҡытың юҡ, исмаһам, тыңла, мин уҡыйым", - тип, ҡыҫҡырып уҡыр ине. Бигерәк тә "Агиҙел" журналында баҫылған Әхмәтзәки Вәлиди яҙмаларын илай-илай уҡыны.

Кеше күңелен, бигерәк тә тормош юлдашыңды аңлай, баһалай белеү - үҙе бер сәнғәттер ул, тип уйлайым. Беҙҙең уйҙарыбыҙ, бергә уҡмашып, килешеп, бер-беребеҙҙе ҡеүәтләп, көҙгә ашлыҡтың бешеүен тиҙләткән нәжегәй ялпылдауын хәтерләтә ине. Шиғырмы, башҡа әйберме яҙһа ла, ул күберәген төнөн, тыныс ваҡытта ижад итер ине. Ете төн уртаһы булһын - ижад ҡыуанысын минең менән уртаҡлашыр ине. Иғтибар менән тыңлап: "Ох, шул тирәһе бигерәк шәп яҙылған", - тиһәм, ул ҡанатланып китер ине. Тик минең баһам ғына нимә инде? Әгәр ҙә уның ижадына профессиональ кимәлдә баһа бирелһәме...

Шулай итеп, әҙибебеҙ ғәзиз күҙҙәре күргәнсе, ҡулынан ҡәләм төшкәнсе, ғүмеренең аҙаҡҡы көндәренә тиклем ижад, ғилем сире менән сирләүен дауам итте.

Һуңғы осорҙа, бигерәк тә Рәшит мәрхүм булғас, "ҡаңбаба" һүҙен йыш ҡуллана башланылар. Ә бит Рәшит үҙе ҡанбаба ине, тик тере сағында ҡәҙерен генә белмәнеләр. Ул урман тауҙарына: Мүнсек түбәләренә, Уралға, Тайыштағы Ҡарағолға, Стәрләләге Шахтауға, Златоустағы Торатауға, Әй буйҙарына, Һояға, Ыҡ һиуҙарына шиғырҙарын теҙҙе.

Үҙе өсөн йәшәмәне бер тамсы ла. Мин ҡайһы ваҡыт, аптырағас: "Һәр ваҡыт кеше ҡайғыртып ғүмерең үтте, үҙең өсөн йәшәргә ваҡытың бөтә бит", тиһәм, ул: "Башҡаларҙы ҡайғыртып, мин бит үҙемдән һуң йәшәйәсәк милләтемде, һеҙҙе, һине, балаларымды ҡайғыртам, үҙҙәрен ҡайғыртыусылар былай ҙа күп...", - тип яуап бирҙе. Ә бит ошо һүҙҙәр аҫтында оло мәғәнә ята. Ни өсөн тигәндә, Рәшит киткәс, ваҡытында ул ҡайғыртҡан кешеләр беҙгә йылымыҡлы мөнәсәбәттә. Бына бит нисек...

**Рәйсә ӘХТӘРОВА.**

ШУЛАЙ ТИНЕ...

# ҺУҢҒЫ ЯҘМАЛАРЫ

### Ҡанбабалар мәктәбе

Фекерҙәре яңы, халҡыбыҙ өсөн ысын ҡиблалы, уйҙары мәҙәни ҙә, ғәжәйеп шәп үҙһынлы ла, йөрәге аҫау, теләге салауатса-бабичса сая ынтылышлы, темпераменты саҡ ҡына ла дипломатияны белмәгән ҡыйыу ҙа, ҡыҙыу ҙа, күңеле эскерһеҙ, ап-асыҡ, туп-тура һүҙле, кеселекле, кешелекле, йәше-ҡартына тиң талапсан, ололарҙы ололоҡлаған, балаларҙы башҡортса һөйгән йәш шағир, ижтимағи эшмәкәр, Магнитогорск менәүәре Әхмәр Үтәбаев Ҡаңбабалар мәктәбе асыу хаҡында бик урынлы вә ваҡытлы һүҙ ҡуҙғата. Мин дә ошо мәктәп тураһында яҙма һәм телдән тарихи хәбәрнамәләр етерлек булғанға күрә, Әхмәрҙең баш доғаһын күтәреп алам, йәштәргә лә, олораҡ быуынға ла ҡыҙыҡ булырлыҡ стилдә, шулай уҡ башҡорт (бер аҙ болғар, татар) тарихсыларына, телселәренә, этнографтарына сәйнәмәк сүбәк итеп, сикһеҙ оло ғилмиәттән ҡыҫҡаса экстракттар яҙмаҡсымын.

Минең инәйем (әсәйем) ҡаңбабалар быуындаманан булып, йәшләй етем ҡалған. Аҡай аймағынан был башҡорт ҡыҙының атаһы, йәғни олатайым Йәйге Баҡсала дүрт пуля атып Григорий Распутинды үлтергән кенәз Йосоповтың да ышаныслы вәкиле Хафиз байҙың хеҙмәтсеһе була. Олатайым ошо байҙың тире-яры, күн, һ.б. сеймал, иген ҡабул итеүсе хеҙмәтсеһе булыу өҫтөнә, йәмғиәттең һәм Романовтар йортонон дарыу үләндәре йыйыусы белгесе лә була. Сихуттан (туберкулеҙдан) иртә үлгән эшлекле ялсыһына мәрхәмәт йөҙөнән Хафиз бай әсәйемде бәләкәс стипендия билдәләп, Зәйнулла ишан Рәсүләвҡа ебәрә. Әсәйем Зәйтүнә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Төмән, Омск, Троицк мәҙрәсәләрендә уҡырға һәм Зәйнулла ишан етәкселегендәге бер махсус комиссиянан рәсми рәүештә Рәсәйҙә һәм Себириәлә беренсе үҫмер ҡыҙ бала - Ҡөрьән-Хафиза титулын, дәхи конспиратив тәртиптә Аҡай башҡорттарының (улар хәҙер Ҡариҙел, Шигер, Әрпә, Аҡа, Әй, Ҡый һәм башҡа йылға буйҙарында, Екатеринбург өлкәһендә һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында йәшәй һәм башлыса татар телендә уҡыйҙар) Өлкән Ҡаңбикәһе, бер ынғай имбикәһе, үлән, таш белгесе итеп билдәләнә. Ҡартнәйем (өләсәйем) Бибикамал 1864 йылда Әбдрәхим ауылында тыуған һәм, яҙыу өйрәтелмәйенсә, кесе йәштән үҡ ҡанбикәлеккә, акушерлыҡҡа, балаларҙы, ҡарттарҙы, хәстәләрҙе дауаларға өйрәтелгән. Уның да ташбикә (аптекарь-минеролог), үләнбикә, емешбикә, имбикә тигән титулдары булған.

### Хөрмәтле Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы хеҙмәткәрҙәре!

Маҡтау малға ла май, тигәндәр боронғолар. Ә тура һүҙ - туғанға ла буш турһыҡ. Ҡотлау йырҙары ҡуш күгәрсенгә оҡшай барғандай. Белмәйем, атаәсәйемде йәшләй фашистар алғангамы - аңлашылмай: ерҙә әллә башҡа яҡын кеше юҡ, әллә үҙен күрһәтә ҡалырға - тәүбә, һуңғыһы булмаһын - барыһы ла атаәсәйен ҡотлай. Ниәтең яҡшы икән - ҡайт та ун ҡат, йөҙ ҡат тәбриклә, моң өсөн дискотека табыу ҙа ауыр түгел...

Ике төркөм Кешеләрҙе ҡотлар инем: тәүгеһе - гүзәлемде - Уралымды донъя күрке итеп һаҡлаусыларҙы, тағы ла йәмләргә йәнен дә йәлләмәүселәрҙе.

Икенсеһе. Миңә тән өләштермәйә яҡын аңлашыла. Тау армыттарының ҡарурманлы йылға буйҙарында ла, ҡылғанлы далалағы ауыл шарттарында ла көн күреүе енел түгел: Исәттең Серов ҡалаһынан Магнитка-Әбйәлилгә тиклем - индустриялизация менән төрмәһеҙ репрессиялар бит - йөҙәрләгән ауыл-ҡалаларҙа үҫергә, йәшәргә тура килде. Минең ғүмерҙә генә лә халҡым меңәр йыл ижад иткән унар меңләп һүҙ, идиома, мәҡәл юғалды. Шуларҙы һаҡлап, ауыл тиренән тыш шағирлыҡҡа маһир булған, ҡаһарманлыҡ ҡылған ир-егеткә, ҡыҙ-ҡырҡынға, килендәргә моң сәләме тапшырылһа ине. Улар бит бөгөн дә ауылдарға тоғро.

Дан һеҙгә, ауылға тоғро алыҫ ҡаһармандар. Был теләгем миңә 65 йәш тулыуға - ғинуар аҙағы, февраль башында үтәлһен ине.

### Үлем түшәгендә ятам...

Мин, Әхтәров Рәшит, үлем түшәгендә ятам. Ислам дине кергәндән һуң бик ҡаты конспирациялә йәшәгән ҡанбабалар ойошмаһының (мин хәҙер 8 ҡәбиләнең Олуғ ҡанбабаһы) һуңғы ағзаһы. Биш башҡорт ҡәбиләһе (Үрге Яйыҡ, Әйҙе-Ҡошсо, Әйҙе-Күҙәй, Аҡа (Өфө үрендә), Арпа Табын) башҡорттары беренсе булып Анағараның (Инәгара, Анғара) һул ҡушылдыҡтарынан катаклизмик ваҡиғаларҙан һуң яны эраның 433 йылында Уралға күсеп ултыра. Уларҙа һәләтлек буйынса һайлап, махсус мәктәптә уҡытып, оло ҡанбабалар тауыш биреүен үткәс, шул уҡ династиянан Олуғ Ҡанбаба һайланған. Уның вазифаһына түбәндәге эштәр ингән:

1. Календарь төҙөү (астрономия, метеорология);
2. Халыҡ тарихын яҙыу;
3. Күрше биләмәләргә алғасҡы (разведка), контрразведка ойоштороу, биләмәлә тыныслыҡ урынлаштырыу;
4. Төрлө бабалар мәктәптәрен ойоштороу;
5. Хәрби юлбашсының кәңәшсеһе булыу.

Беҙҙең династия 363 йылдан башлап килә. Тәүҙә уңғарҙар (венгр) бүләһе булғанбыҙ. Беренсеһе - Ҡорт-Ҡорум, икенсеһе - Будуни-Ҡорум, өсөнсөһө - Ай-Таған.

Үкенерлек булмаһын. Хәкимов, Рафиҡовтай (Әхиәр Хәкимов, Булат Рафиҡов - **Ә.F-Y.**) яҙыусылар, ғалимдар командировкаға килһен берәй 4-5 көнгә. Хәҙер аслыҡ түгел. Ҡунафин да үҙенең Әй нәсәпнамәһенә аңлатма таба алыр. Сөнки Ҡол-Ғәли - минең бер прямой потомоктарҙан. Ул Олуҡ түгел, ә өлкән Ҡанбаба исеме менән Төркөстанға хәрби разведка эштәре менән ебәрелә. Унда ул мөдәррис ролен легаль үтәй. Ваҡытында ҡайтып етеп, етерлек мәғлүмәт биргәнгә башҡорттар бер йыл буйы Бату ғәскәрҙәрен тар-мар итеп тора ала.

Ғөмүмән, килегеҙ. Тел һөйләй, логика дөрөҫ - вәт. Ҡул һәр саҡ яҙа алмай шул. Быныһын да көсәнеп яҙҙым. Килеп ҡалығыҙ. Бер ҡат ҡәбер ҡаҙа башлап, үлем алдынан...

**Рәшит ӘХТӘРИ.**

**(Шиғырҙарын 16-сы биттә уҡығыҙ).**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХӘТЕРЕҢ ТАРҠАЛА ИКӘН...

## көн дә шиғыр ятла

**"Ҡайҙа асҡыстар?", "Кисә генә был түләүҙәр өҫтәлдә ята ине!", "Ирен буяғысым ҡайҙа юғалған?" - әгәр үҙеңә шундай һорауҙарҙы йыш бирә башлағанһың икән, тимәк, хәтеренде "дауалап алырға" ваҡыт еткән. Беҙҙең күптәребеҙ хәтер тарҡалыуға әллә ни иғтибар бирмәй һәм был сирҙең күпме яфалар килтерергә мөмкин икәнлеге тураһында ла аңлап бөтмәй. Беҙ хәтеребеҙ тарҡалыу һөҙөмтәһендә өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерәбеҙ. Юғалған билеттар арҡаһында отпускыға хәүеф янай, аҡса янсығын тапмауыбыҙ һөҙөмтәһендә бер нисә көн аҡсаһыҙ ултырырға мөмкин, юғалған асҡыстар әхирәтеңә барып төн уҙғарырға мәжбүр итә. Шулай булғас, хәтер тарҡалыу әллә ни бәләкәй булмаған етешһеҙлек була түгелме? Әйҙәгеҙ, уның менән нисек көрәшергә - шул турала һөйләшәйек.**

### Юғалтыусы

Ғөмүмән, психологтар хәтерҙең урыны-урыны менән тарҡалып алыуын тәбиғи һанай. Беҙ бер нисә эште бер юлы алып барабыҙ һәм шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең үтәлергә тейешле тағы әллә күпме бурыстарыбыҙ хаҡында ла уйлап өлгөрәбеҙ. Шуға күрә беҙҙең мейенең бөтәһен дә эшкәртеп өлгөрмәүе һәм бер нисә мәғлүмәттең юғалыуы мөмкин. Әммә был берҙән-бер сәбәп түгел. Йыш ҡына юғалтыуҙар һәм онотоуҙар аҡҡы аңда һаҡланған үҙ өҫтөңә яуаплылыҡ алмау теләге, вазифалар алдында ҡурҡыу менән бәйле. Сөнки, әгәр һине юғалтыусы тип һанайҙар икән, һиңә бер эште лә ышанып тапшырмаясаҡтар: ниңә, һин бит барыбер мотлаҡ онотаһың, юғалтаһың, кәрәкмәгән урынға һалаһың, тәғәйен булмаған кешегә бирәһең.

Юғалтыуҙың тағы ла бер психологик сәбәбе - ул аҡҡы аңыбыҙҙың йоғонтоһо. Бер ваҡыт минең бер әхирәтем үҙен эштән ҡыуыуҙары мөмкин, тип шикләнә башланы. Һәм отпускыла булған сағында ул бер нисә көн буйы яҙмышын хәл итә торған шылтыратыу көттө. Һөҙөмтәлә телефонын юғалтты. Аҡҡы аңы менән ул телефонын үҙенең борсолоуҙары менән бәйләгән, сөнки нәҡ уға бит шефтың шылтыратыуы килергә тейеш ине. Һәм мин дә, моғайын, анализ һөҙөмтәләрен үҙемдең һаулығым хаҡында бер ниндәй ҙә насар хәбәр ишетмәҫ өсөн юғалтҡанмындыр.

Нимә эшләргә һуң? Әйберҙәрҙе юғалтыуҙы һәм онотоуҙы туҡтатыр өсөн психологтар, беренсенән, хәтер тарҡалыу - ул проблема һәм уның сәбәбе үҙебеҙ, ә нәҫелдән түгел икәнде аңларға кәңәш итә. Икенсенән, үҙегеҙгә йыш ҡына: "Был юғалтыу нимәгә алып килде?"- кеүек һорау бирегеҙ.

### Күнекмәләр яһа

Ышан, ни тиклем йышыраҡ күнекмәләр яһайһың, шул тиклем бындай аңлашылмаусанлыҡтар һирәгерәк ҡабатланыр. Иң яҡшы "тренажерҙар" булып шиғыр йәки йырҙар ятлау (көнөнә берәү) тора. Шулай уҡ кроссвордтар, башватҡыстар сис. Ә тағы ла көн һайын шундай күнекмәләр яһап ҡара: кискеһен түшәккә ят, күҙҙәреңде йом һәм уҙған көнөңдөң бәләкәй генә деталдәренә тиклем хәтереңдән уҙғарып сыҡ: нисек уяндың, нимәгә ҡараның, иртән нимә ашаның. Бындай күнекмәләр һине хәтер тарҡалыуынан ҡотҡарыр.

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

**Германиялағы диоксин арҡаһында килеп тыуған шау-шыу Рәсәй халҡын да уйланырға мәжбүр итте. Беҙҙәге продукция шул тиклем таҙамы, әллә халыҡҡа ысынбарлыҡ барып етмәйме?**

# ДИОКСИНЛЫ РӘСӘЙ

## Беҙ немец итенән ҡурҡып, аяҡ аҫтындағы ағыуҙы шәйләмәйбеҙ



"Беҙҙә күҙәтеү механизмы эшләмәй, шуға ла ундай осраҡтар булмай, - ти химия фәндәре докторы Ефим Бродский. Ул Рәсәй Фәндәр академияһы Экология һәм эволюция проблемалары институтының аналитик экотоксикология лабораторияһын етәкләй һәм диоксиндар менән профессиональ рәүештә шөғөлләнә. - Диоксинға анализ бик ҡиммәт һәм уны берәү ҙә тиктомалдан тота һалып эшләмәйәсәк. Шуға ла бары тик сит илгә экспортланған продукттар ғына тикшерелә".

Е. Бродский әйтеүенсә, Рәсәйҙә лә тупраҡтың һәм төрлө объекттарҙың диоксин менән ағыуланған бик күп урындары билдәле. Был токсик ҡалдыҡтарҙы ҡайҙа итергә белмәгәнлектән барлыҡҡа килә - уларҙы утилләштереү бик ауыр һәм ҡиммәт, шуға ла арлы-бирле генә һаҡлайҙар йәки бөтөнләй сығарып ташлайҙар. Ә һөҙөмтә - иларлыҡ. Мәҫәлән, тарихҡа 1971 йылда АҠШ-тың Таймс-Бич ҡалаһында булған ваҡиға мәғлүм. Унда диоксинлы химик ҡалдыҡтарҙы техник май менән бергә ҡушалар ҙа, ипподромдағы туҙанды "баҫтыралар". Өс көндән һуң ярыш урыны ҡош мәйеттәре менән ҡаплана, артабан аттар, спортсылар, балалар, йорт хайуандары ауырый башлай. Бөтөн ҡала халҡын эвакуациялайҙар. Бары тик өс йылдан һуң ғына барыһына ла диоксин ғәйепле булыуын асыҡлайҙар...

Ә беҙҙә? Былтыр декабрҙә Американың "Педиатрия" фәнни медицина журналында Рәсәйҙең Чапаевск ҡалаһында үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре баҫылып сыға. Араларында беҙҙең ватандаштарыбыҙ ҙа булған халыҡ-ара ғалимдарҙың ҙур төркөмө 8-11 йәшлек 499 малайҙың үҫеүен күҙәткән. Химпредприятиелары ҡаланың мөхитен диоксин һәм башҡа хәүефле химикаттар менән бысрата һәм был кимәл бик юғары була. Организмдарында "химия" күберәк булған малайҙарҙың үҫеше аҡырыныраҡ барған һәм уларҙың буйы ла бәләкәйерәк булған. Был күрһәткестәр диоксиндың балаларҙың үҫешенә кире йоғонто яһауын күрһәтә һәм ғалимдар тикшеренеүҙәрен артабан да дауам итергә уйлай. Сөнки диоксин яман шеш һәм шәкәр ауырыуы барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе була. Бынан тыш, улар ҡатын-ҡыҙ енси гормондары - эстроген булараҡ та үҙ ролен уйнай һәм малайҙарҙың енси үҫешенә кире йоғонто яһай, уларҙың репродуктив ҡеүәте кәмей. Был күренеш быуындан-быуынға тапшырыла.

Быны Вьетнамдағы ваҡиғалар ҙа раҫлай. Һуғыш үткәндән, американдар джунглиҙарға "ҡыҙғылт-һары агент" - диоксин булған пестицидтар һипкәндән һуң 40 йыл үтһә лә, бысраныу кимәле кәмеһә лә, кире һөҙөмтәләр һаман үҙен һиҙҙерә. Сөнки диоксин кеше организмында 10 -12 йылдан һуң ғына яртылаш тарҡалырға мөмкин, тимәк, был процесс тиҫтәләрсә йылдар дауам итәсәк.

Украина президенты Виктор Ющенконың битендә сағылыш тапҡан диоксин менән ағыуланыу эҙен барығыҙ ҙа иҫләйҙер. Хатта ныҡ ағыуланған кеше лә тере ҡала, әммә уның организмында етди үҙгәрештәр күҙәтелә. Быны СПИД менән сағыштырырға мөмкин: был сир менән яфаланалар, ә икенсе сирҙәрҙән - пневмония, туберкулез, ҡан ауырыуҙарынан үләләр.

**"Аргументы и Факты" гәзитенән.**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# КӨЛӨГӨҘ ҘӘ КӨЛӨГӨҘ -

## йөрәк һау килеш һаҡланыр

**Сит ил ғалимдарының яңы алымдар ярҙамында уҙғарған тикшеренеүҙәре раҫлауынса, көлгән ваҡытта сикә мускулдарында көсөргәнешлекте йомшартып, нервылар системаһына һәм мейе эшмәкәрлегенә яҡшы тәьҫир итеүсе айырым бер импульстар барлыҡҡа килә икән. Хатта беҙгә күңелһеҙ булған осраҡта ла, үҙеңде көсләп яһалма йылмайырға мәжбүр итәһең икән, механизм үҙ көсөндә ҡалып, күңелебеҙгә еңеллек киләсәк. Ғалимдар фекеренсә, көлөү - ул кешеләр тарафынан яһалған "социаль рефлекс", сөнки көлгән йәки йылмайған кешене күреп, башҡа кешеләрҙең дә кәйефе күтәрелә.**



Көлөү беҙҙең йөрәккә яҡшы тәьҫир итә. Мэриленд Штатындағы Балтимор Медицина үҙәге кардиологтары ошондай ҡарарға килгән. Ғалимдар сәләмәт кешеләр менән йөрәк ауырыулы кешеләрҙең ҡан төркөмдәрен тикшергән. Һөҙөмтәлә йөрәк-ҡан тамырҙары менән ауырыған кешеләрҙең 40 процентының шул уҡ йәштәге, ләкин был сирҙәр менән яфаланмаусы кешеләргә ҡарағанда әҙерәк көлөүе асыҡлана.

"Һеҙҙең йөрәкте дауаларға кәрәк булған саҡта көлөү иң яҡшы дарыу, тигәнде беләбеҙ, - ти Мэриленд Штаты Университетының кардиология үҙәге директоры Майкл Миллер. - Шулай ҙа беҙ ни өсөн көлөү йөрәкте һаҡлай икәнен һаман белмәйбеҙ, беҙ тик нервы-психологик көсөргәнеш беҙҙең ҡан тамырҙарын тотороҡландырыусы, һаҡлаусы барьер булып торған эндотелияның имгәнеүе менән бәйле икәнен беләбеҙ. Нервылар көсөргәнеше һәм пессимизм коронар артерияларында холестерин туплаусы ҡайһы бер шешеү реакцияларына килтерергә мөмкин. Ә был һуңғы сиктә йөрәк өйәнәгенә алып киләсәк", - ти доктор Миллер.

Америка ғалимдары шундай асыш яһаны: көлөү - ул, образлы әйткәндә, "эске аэробика". Кеше ихлас итеп йылмайһа, һыны ҡатҡансы көлһә, йөрәк эшмәкәрлеге яҡшыра, ҡан кислород менән тулылана, ә артыҡ калориялар тиҙерәк яна.

ҒӘЖӘЙЕПХАНА

# ВАМПИРҘАР ӘКИӘТТӘ ГЕНӘМЕ?



**Эш көнө аҙағында аяғын көскә һөйрәп бер танышым килеп инде. Йөҙө ап-аҡ, быға тиклем күр генә яңғыраған тауышы ла саҡ ишетелә.**
**- Һиндә ултырып хәл алайым әле, югиһә, ҡайтып етә алмаҫмын, - тине ул саҡ тын алып.**

Бер аҙ хәл йыйғас:

- Һин вампирҙар булыуына ышанаһыңмы? - тип һораны. Минең яуапты ла көтөп тормай, һөйләп алып китте.

- Почтаға ингәйнем, "вампир" һөжүм итте, - тип башланы һүҙен. - Сиратка баҫҡайным ғына, елкәм сәнсеп ауыртырға кереште. Яҙлыҡөҙлө остеохондроз йонсота, әммә былай ҡапыл башланмай ине. Бер аҙҙан тотош умыртҡа һөйәге сәнсергә тотондо. Баҫып торор әмәл юҡ. Шул ваҡыт арттан миңә кемдер теҡләгәнен тойҙом. Икебеҙҙең ҡараш осрашты, әммә ул күҙемә түгел, минең аша ҡарай ине. Ҡапыл тубыҡтарым тотмаҫ булды. Ингәс тә иғтибар иткәйнем уға: аҡ йөҙлө, фырт ҡына кейенгән урта йәштәрҙәге һылыу ҡатын ине. Аҡса ваҡлатып алды ул минән. Аҡса аша энергия алмашыу, йәғни бәйләнеш барлыҡҡа килгәндер, тип уйлайым.

Йомошон да йомошламай, ҡобараһы осоп сыҡҡан почтанан танышым. Доғаларын уҡып, ял итеп алғас, бер аҙ тынысланғандай, йөҙөнә нур ингәндәй булды.

- Һуңғы ваҡытта эзотерик әҙәбиәт менән ныҡ мауыға башланың, ахыры, - тинем, әлеге хәлде шаяртыуға борорға, танышымды тынысландырырға теләп. Унын иһә минең менән һүҙ көрәштерергә, бәхәсләшергә теләге лә, көсө лә юҡ ине.

Вампирҙар тураһында һәр кем ишеткәне барҙыр. Ҡара көстәр араһында иң күп легенда, әкиәттәр тап улар хаҡында бит. Ниндәй генә кинолар юҡ! Кеше ҡаны менән туҡланып, ғүмерен оҙайтып йөрөүсе вампирҙар юҡ, әлбиттә, бөгөн. Ә бына энергетик вампирҙарҙың булыуын психологтар инҡар итмәй. Энергетик вампир тип, энергетикаһы боҙолған, кеше энергияһы менән туҡланғандарҙы әйтәләр. Уларҙың бер нисә төрө була: энергия һәм мәғлүмәт менән туҡланыусылар. Төүгеләре, билдәле инде, кеше көсөн, энергияһын алып йәшәй. Улар - яҡындарына, балаларына тыныс көн күрһәтмәйенсә, зарыҡтырып йәшәгән хроник эскеселәр, наркомандар, һәр ваҡыт үҙен йәлләтеп, көсһәҙ, бахыр итеп күрһәтеп, шуның менән әргә-тирәһендәгеләрҙе интектергән мыжыҡтар, әрләшеп, талашып, кешене кәмһетеп, шунан ләззәт, көс алыусы агрессив, боласыл кешеләр.

Мәғлүмәти вампирҙар иһә мәғлүмәт йыйыуҙан, таратыуҙан, үҙебеҙсә әйткәндә, ғәйбәт һөйләүҙән, ишетеүҙән киңәнес ала. Ундайҙар хаҡында, кеше сәйнәмәһә, ас ҡала, тиҙәр. Улар ҡорбанының эс-бауырына инеп, үҙенә кәрәкте - серҙе төнсөнөп ала ла, үҙендә бер аҙ "эшкәртеп", икенсе, өсөнсө кешегә һөйләй, шуның менән теге кешене көсһеҙләндерә, түбәнһетә, хатта ауырыуға һабыштыра, үҙе шунан рәхәтлек ала, кешегә насар булғандан ләззәт тойғоһо кисерә.

Кеше үҙ энергияһын биргәнен, ауыртыу булмаһа ла, тоя. Ҡапыл хәлһеҙләнә, бер туҡтауһыҙ иҫнәй, йоҡоһо килә, башы әйләнә, хатта ҡоҫҡоһо килә башлай.

Энергетик вампирҙың ҡорбаны булмаҫ өсөн ни эшләргә һуң?

Кешенең биоляланы һиҙгер булһа, энергетикаһы боҙолған кешене белә, тоя. Әгәр ҙә тоймаһа, улар тоҙағына эләкмәҫ өсөн һаҡланырға кәрәк. Нисек һаҡланырға? Доға уҡырға. Амулет-бетеү йөрөтөү ҙә ярҙам итә. Мәрйен, беләҙек, муйынсаҡтар ҙа һаҡлау көсөнә эйә. Юҡҡа ғына ошондай биҙәүестәргә өйрәнгәндәр, уларҙы сисһәм, үҙемде яланғас һымаҡ һиҙәм, тимәйҙер. Традицион булмаған медицина яҡлылар иһә, тын алыу күнекмәләре ярҙамында энергияны тулыландырырға кәңәш итә. Мәсеткә барыу, хәйер биреү ҙә етмәгән энергияны тулыландыра, күңелде ыңғай, позитив фекер менән тултыра. Яуыз уйлы, һүҙле, яман күҙле кешеләрҙән күңелдән генә үҙенде туҡыма, простыня менән урап һаҡланырға була. Мин, мәҫәлән, үҙем шулай эшләйем - ярҙам итә. Ғөмүмән, энергетик вампирҙарҙан ҡурҡырға ярамай. Бәлки, үҙебеҙ ҙә вампирҙыр...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Бәәтийнү** - белә алмаҫлыҡ дәрәжәлә йәшерен булған зат. Үҙе йәшерен нәмәләрҙе белә. Үҙе бер кемгә лә күренмәй, ләкин унын барлығы барса ҡолдарына мәғлүм. Көнөнә өс мәртәбә ошо исемде ҡабатлаған кеше хаҡ эштәрҙе белер.

**Әл-Үәлииү** - барса ғаләм менән, бөтә нәмә менән идара итеүсе. Унын ҡарары һәр ваҡыт бойомға аша. Был исемде йыш ҡабатлаған бәндә Аллаһы Тәғәләнең изге хөкөмөнә ирешер.

**Әл-Мүтәғәәлииү** - бөйөктәрҙең иң бөйөгө. Ул үҙе яралтҡандарҙың бөтә ихтыяждарынан бөйөк. "Йәә Мүтәғәәлииү" тигән кеше үҙенең тиңдәштәренән өҫтөн, тәүфиҡлы булыр һәм уның яуызлығы китер.

**Әт-Тәүүәәбү** - тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе. Ялбарыуҙарға яуап биреүсе, гонаһтарҙы ғәфү итеүсе. Был исемде һәр саҡ әйткән бәндәнең тәүбәләре ҡабул булыр.

**Әл-Мүнтәкииму** - гонаһлы бәндәләрҙән ғәҙеллек менән үс алыусы, яза биреүсе. Раббыбыҙҙың был исемен йыш ҡабатлаусыны Ул үҙенең язаһынан ҡотҡарыр.

**Әл-Ғәфүү** - гонаһтарҙы ғәфү итеүсе зат. Уның мәрхәмәте киң. Даими рәүештә был исемде әйтеү бәндәләрҙең гонаһтарын ғәфү итеүгә килтерә.

**Әл-Рауфүү** - мәрхәмәтле, бәндәләрҙе ҡыҙғаныусы зат. Ул тупаҫлыҡтан азат. "Йәә Рауфүү" исемен даими әйтеп торған кешегә, Хаҡ Тәғәлә яҡындарҙан булыр.

**Әл-Мәәликәл-мүлки** - тулы хөкөмлө батша. Бер кем дә уның ҡарарын кире ҡаға, тәнҡитләй алмай һәм Ул ҡушҡанға икеләнә алмай. Был исемде йыш әйткән кеше Раббының рәхимлегенә ирешер.

**Әҙ-Ҙуль-Жәләәли үәл Икрам** - үҙенсәлекле бөйөклөккә һәм хөрмәткә лайыҡ булған зат. Етешһеҙлектәрҙән бөтөнләйгә азат, маҡтауҙарға лайыҡ. Был исемде йыш ҡабатлаусының етешһеҙлектәрен Раббыһы ғәфү итер.

**Әл-Муксиитү** - иң бөйөк ғәҙеллеккә эйә булған зат. Уның хөкөмдәре ғәҙел һәм хаҡ. Хаҡһыҙға рәнйетелгәндәрҙең рәнйетеүселәренән үс алыусы. Рәнйетелгәндәр рәнйетеүселәрен ғәфү итһә, һуңғыларын шатландырыр.

**Әл-Жәмииғү** - йыйыусы. Ҡиәмәт көнөндә барса мәхлүҡтәрҙе хөкөм итер өсөн йыйыусы. Был исемде даими әйтеүсе юғалтҡан мөлкәтен (әйберен) табыр.

**Әл-Ғәнийү** - бай. Уның байлығы биреү менән кәмемәҫ. Ул бер кемгә лә мохтаж түгел. Уның ярҙамына һәр кем мохтаж. Был исемде йыш ҡабатлаған кешегә Аллаһы Тәғәлә һаулыҡ бирер, зәхмәттән һаҡлар.

**Әл-Мүғнииү** - теләгән бәндәләренә байлыҡ биреүсе, байлыҡ менән һынаусы зат. Был исемде уҡып, ҡулына өрөп, кеше зәхмәтле урындарын һыйпаһа, зәхмәттән азат булыр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Илаһҡа илткән оҙон юл

Бөгөнгө хәл-ваҡиғаларҙан бары тик кеше аңынан юғарыраҡ аңды ярҙамға саҡырып ҡына өҫтөн була алабыҙ. Шулай итеп, беҙ ошо аңдың сағылышына - бик мөхәббәтле, бик бай кешеләргә әүерелербеҙ. Мин һеҙҙең турала әйтәм һәм Илаһтың кеше аңынан өҫтөн тороусы берҙән-бер сығанаҡ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алам.

Көсөргәнештән арынып, үҙегеҙҙең өндәге тәшөгөҙ менән идара итеп, хыялға бирелегеҙ. Быны эшләүе ауыр түгел. Кемдер бер ваҡыт: "Аллаһтан баш тартмағанбыҙ, ул ҡыҫырыҡлап сығарылған", - тигән. Ысынлап та, беҙ өндә төш күреү өсөн ваҡыт тапмайбыҙ.

Әгәр һеҙ идара итеп булған өндәге төш өсөн ваҡыт тапмаһағыҙ, һеҙгә бер кем дә ярҙам итә алмаҫ. Тормошоғоҙ еңеләймәҫ. Ул, Шекспир һүҙҙәре менән әйткәндә, "Алйот һөйләп биргән повесҡа оҡшар: унда һүҙҙәр һәм дәрт күп, тик мәғәнә генә юҡ".

Йыһанға рәхмәтле булып, Юғары аңдан ярҙам алырға әҙерһегеҙме?

Түбәндәге инструкцияны хәтерегеҙҙә ныҡлап ҡалғансы уҡығыҙ.

## Нисек итеп Илаһҡа яҡынайырға?

● Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.

● Уйығыҙҙа ғына үҙегеҙ ултырған бүлмәне һүрәткә төшөрөгөҙ, уны яҡтылыҡ менән тултырығыҙ, уны яратығыҙ.

● Үҙегеҙ ултырған өйгә өҫтән ҡарайһығыҙ икән тип күҙ алдына килтерегеҙ, уны яҡтылыҡҡа сорнағыҙ, үҙегеҙҙең һөйөүегеҙҙе йүнәлтегеҙ.

● Өҫкәрәк күтәрелегеҙ һәм үҙегеҙҙе өҫтән ҡалаңы ҡараған итеп хис итегеҙ, уны нур һәм һөйөү менән солғағыҙ.

● Тағы ла өҫкәрәк күтәрелегеҙ һәм ил өҫтөнә ҡарағыҙ. Уға ла яҡты нур һәм һөйөү йүнәлтегеҙ.

● Тағы ла өҫкәрәк үрләгеҙ. Планетаға яҡтылыҡ һәм һөйөү ебәрегеҙ.

● Хәҙер тотош галактика кимәленә күтәрелдегеҙ. Уға ла яҡты нур һәм һөйөү оҙатығыҙ.

● Нисек итеп һеҙҙә нур һәм һөйөү сағылғанды тойоғоҙ. Уны шул уҡ юл менән кире алып ҡайтығыҙ: Ҡояш системаһынан - Ергә, илегеҙгә, ҡалағыҙға, өйөгөҙгә, бүлмәгеҙгә.

● Күҙегеҙҙе асығыҙ һәм уйығыҙҙан ғына: "Мин үҙ аңымда һәм Илаһҡа яҡынлаштым",-тип әйтегеҙ.

Яҙманы ситкә алып ҡуйығыҙ һәм ошо пункттарҙа яҙылғанды эшләгеҙ. Лев Толстой: "Һәр кем нисек итеп Кешелекте үҙгәртергә, тип уйлай, әммә бер кем дә нисек итеп үҙен үҙгәртеү тураһында уйламай", - тип яҙған. Һеҙ әле генә үҙегеҙҙе үҙгәрттегеҙ, аңығыҙҙы киңәйттегеҙ. Хәҙер һеҙ үҙ ауылығыҙ, ҡалағыҙ, илегеҙ кешеһе генә түгел, һеҙ - донъя кешеһе. Ошо мәлдән алып тормошоғоҙҙа яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр башланыр.

Тик ни өсөн быға тиклем бөрәү ҙә - ата-әсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа, диндарҙар ҙа һеҙгә был хаҡта һөйләмәгән? Йә улар үҙҙәре лә был турала белмәгән, йә үҙҙәре һынап ҡарағандан һуң, быға алдан әҙерлек булырға тейеш, тип уйлаған. Һеҙҙең өсөн алдағы быуынтарҙа яҙылғандар әҙерлек булды. Йүгереү өсөн тәүҙә шыуышырға һәм атларға кәрәк. Ә хәҙер һеҙ йүгерергә лә әҙер.

**Роберт СТОУН.**



## 31 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 17-я серия
22.20 "Ванга. Мир видимый и невидимый"
23.30 "Ночные новости"
01.00 "Прелюдия к поцелую"
03.00 Новости
03.05 "Прелюдия к поцелую"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 " Вести-Башкортостан"
09.05 "Великие пророчицы. Ванга и Матрона"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Русский шоколад". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 241-я серия
17.55 "Все к лучшему", 11-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 82-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Гадание при свечах", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
01.10 "Честный детектив"
01.45 "Благочествия Марта". Музыкальный фильм
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". "В условиях неочевидности". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"! "Дорога", "Первый пенальти". Криминальный сериал
21.30 "Зверобой". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Комедийный сериал
01.10 "Главная дорога"
01.45 "До суда"
02.45 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Страна глухих"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Казцинк-Торпедо" (Усть-Каменогорск)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Страна глухих"**
**01.15 "Прогноз погоды"**

## 1 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "ЖКХ"
11.40 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 18-я серия
22.20 "Борис Ельцин. Первый"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь. глядя". Ток-шоу
00.50 "Знахарь". Драма
02.45, 03.05 "Куда приводят мечты"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 " Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Русский шоколад"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 242-я серия
17.55 "Все к лучшему", 12-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 83-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Гадание при свечах", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.45 "Вести+"
00.05 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
00.55 "Смертельный удар"
03.15 "Большая любовь-3"
04.20 "Городок"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"!" "Последняя игра", "Пропажа". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.35 "Кулинарный поединок"
02.35 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Шэп арба"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Именинница"**
**17.30 "Деньги к деньгам"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.30 Новости (на русс. яз.)**
**19.00 Открытый Чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Чехов)**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Именинница"**
**00.45 "Прогноз погоды"**

## 2 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "ЖКХ"
11.40 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 19-я серия
22.20 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня", 9-я серия
00.40 "День Сурка"
02.40, 03.05 "Убийство в клубе "Чиппендейлс"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Шутки большого человека. Евгений Моргунов"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Русский шоколад"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 243-я серия
17.55 "Все к лучшему",13-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 84-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Гадание при свечах", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.35 "Вести+"
23.55 "Исторические хроники"
00.50 "АРН - тамплиер"
03.35 "Большая любовь-3"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"!""Деревенская история", "Смертельный трюк". Сериал
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Суд присяжных"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Валентин"**
**17.15 "Тэмле"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.25 Открытый Чемпионат России по хоккею - чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Авто" (Екатеринбург)**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Валентин"**
**00.45 "Прогноз погоды"**

## 3 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "ЖКХ"
11.40 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Доктор Тырса", 20-я серия
22.20 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Судите сами" с Максимом Шевченко"
00.40 "На расстоянии удара". Триллер
02.40, 03.05 "Женатый"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать!"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 " Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.50 "Русский шоколад"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 244-я серия
17.55 "Все к лучшему", 14-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 85-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Гадание при свечах", 10-я и 11-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
01.00 "Обман"
03.05 "Большая любовь-3"
04.15 "Городок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайные происшествия"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Ментовские войны". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Прощай, "Макаров"! "Мститель", "Опасный кредит"
21.30 "Зверобой. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Бальзаковский возраст, или все мужики - сво..." Сериал
01.45 "Дачный ответ"
02.50 "Суд присяжных"
03.55 "Детектив Раш"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр. "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Экиэт китабы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Сломанные цветы"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 "Сломанные цветы"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 4 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "ЖКХ"
11.40 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.15 "Женский журнал"
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо"
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Золотой граммофон"
00.30 "Большой Куш". Комедийный боевик
02.30 "Кто была та леди?"
04.40 "Жизнь на Марсе"
05.25 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15, 04.00 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.50 "Русский шоколад"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья", 245-я серия
17.55 "Все к лучшему", 15-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 86-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Кривое зеркало"
23.05 "Девчата"
00.00 "Пункт назначения"
01.50 "Горячая десятка"
03.00 "Большая любовь-3"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
22.00 "День отчаяния". Криминальная драма
00.00 "Ржев. Неизвестная битва Георгия Жукова"
01.35 "Амнезия". Триллер
03.35 "Суд присяжных"
04.35 "Детектив Раш"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**11.30 "Йома"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Кактус"**
**17.30 "Истории"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Криминальный спектр"**
**18.25 Открытый Чемпионат России по хоккею - чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Газовик" (Тюмень)**
**21.00 "Деньги к деньгам"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 "Кактус"**
**00.45 "Прогноз погоды"**

## 5 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Прости нас, первая любовь"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Вкус жизни"
12.15 "Среда обитания"
13.10 "Моя родословная"
14.00 "Ведьмина гора". Приключения
16.00 "Россия от края до края"
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
18.00 "Коко де Шанель". Биографическая драма
20.00 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Минута славы. Продолжение"
22.00 "Прожекторперисхилтон"
22.40 "Детектор лжи"
23.40 "Гонзо: жизнь и творчество доктора Хантера С. Томпсона". Биографическая драма
02.00 "Эдвард руки-ножницы"
04.00 "Жизнь на Марсе"

### РОССИЯ 1

05.00 "Одинокий игрок"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Детективное агентство "Иван да Марья". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Детективное агентство "Иван да Марья". Сериал
15.20 "Шоу "Десять миллионов"
16.20 "Черная метка". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 Хоккей
22.55 "Песочный дождь". Мелодрама
00.55 "Поцелуй бабочки". Драма
03.05 "Спецотряд "Лезвие"
05.00 "Комната смеха"

### НТВ

05.25 "Воскресенье в женской бане"
07.15 "Лошарик". Мультфильм
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Их нравы"
09.25 "Живут же люди!"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.20 "Особо опасен!"
14.00 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.55 "Музыкальный ринг НТВ". Супербитва
00.10 "Держи ритм". Биографическая драма
02.55 "Чапаева ликвидировать!" Док. фильм
03.50 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Одиссей"**
**11.30 "Тамыр"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Надо знать!"**
**14.00 "Быть Стэнли Кубриком"**
**15.30 "Автограф". Ф. Надршина**
**16.30 "Народная музыка"**
**17.00 "Орнамент"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Третий звонок". С. Лобозеров "Семейный портрет с посторонним". Спектакль Государственного академического русского театра драмы**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 "Байык-2010"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 6 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Бег от смерти"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.15 "Ванга. 50 виртуальных игр"
13.20 "КВН. 50 виртуальных игр"
14.10 "Апостол", 1-4 серии. Военная драма
17.50 "Ролан Быков. "Я вас, дураков, не брошу..."
18.50 "Похороните меня за плинтусом". Драма
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Шоу ни бе ни ме нехило"
23.30 "Познер"
00.30 "Мачеха"
03.00 "Жизнь на Марсе"

### РОССИЯ 1

05.45 "В последнюю очередь"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Племянник"
11.40, 14.30 "Детективное агентство "Иван да Марья"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
15.50 "Смеяться разрешается"
17.40 "Танцы со Звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Мелодия любви". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Два веселых гуся"
00.30 "Фальшивая личина". Криминальная драма
02.20 "Команда". Криминальная драма

### НТВ

04.45 "Воскресенье в женской бане"
06.40 "Приключения пигвиненка Лоло". Мультфильм
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Дело темное"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Шпильки-3". Криминальная драма
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Месть без права передачи". Криминальная драма
23.40 "Нереальная политика"
00.10 "Авиаторы"
00.45 "Город грехов". Триллер
03.05 "Гоголь и ляхи"
04.00 "Детектив Раш". Сериал

### БСТ

**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 "Салям"**
**08.00 "Дарю песню"**
**10.00 "Тамыр представляет..."**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Истории"**
**14.00 "Мошенники"**
**15.45 "Народная музыка"**
**16.15 "Уравнение судьбы"**
**16.55 Чемпионат России по волейболу среди мужских команд. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Локомотив" (Новосибирск)**
**19.00 "Замандаш". К. Зиганшин**
**19.30 "Музыка на канале"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Весело живем"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Вечер.com"**
**23.00 "Мошенники"**
**00.45 Прогноз погоды**

## АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

**Хәбәр ителеүенсә, "Айыҡлыҡ - йәшәү нормаһы" тигән өс көнлөк семинарҙа ҡатнашыу өсөн 2011 йылдың 2 февралендә республикабыҙға Мәскәүҙән Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһының алкоголь буйынса эксперт советы ағзаһы, Рәсәйҙә айыҡлыҡ хәрәкәтенең төп лидеры профессор Владимир Жданов киләсәк.**

Профессор Владимир Ждановтың семинар дәрестәре 2 февраль Нефтекама ҡала мәҙәниәт һарайында, 3 февраль Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында, 4 февраль Белорет ҡалаһы мәҙәниәт һарайында үтәсәк.

*ЗАУЫҠ*

**Рәшит ӘХТӘРИ**

# АУЫР САҠТА БЕРГӘ ТҮҘӘМЛЕК,

## Беҙ ирҙәргә кәрәк берҙәмлек

### Йыйынсәсән Ҡанбаба һүҙе

Аллаларҙың Аллалары торған,
Сәсән хыялдары менән тыуған,
Тимерғаҙыҡ йондоҙ - бағананан
Аҡбуҙ толпарымды сисеп алған,
Башҡортома башҡорт йырым бар,
Йыр индерер алда ҡырым бар;
Уй-ниәткә ҡурйын-ырым бар,
Йыр биҙәкләр мең моң - һырым бар,
Быуаттарҙың йөҙәрен бер бәйләп,
Ат өҫтөндә атайсалды айҙап,
Уралымда минең тором бар;
Рәсәй үҙәгендә ораһығыҙ,
Тыу-тамғаға тирмә ҡораһығыҙ.
Ике Иҙел ҡосҡан биләндә
Башҡорт мәркәзендә, иләндә,
Мондар иҫкән, йырҙай илемдә,
Устай сығып торған телемдә,-
Тораһығыҙ баҫып телемдә;
Таптамағыҙ бысраҡ аяҡ менән,
Киҙәнмәгеҙ мәкер таяҡ менән,
Мин һөйгәндәй уны һөйөгөҙ,
Йәмле ергә йәмдәр өйөгөҙ!
Йәмдән дә йәм Өфөм түшәм ҡуйған,
Салауатын йәнәш ишләп ҡуйған
Ошо ерҙә һеҙгә һүҙем бар,
Бар халҡымдың моңо-һүҙе һеңгән,
Аң-һыҙаты йөҙ быуаттан ингән,
Мең һөнәрҙән мең һөнәрем еңгән,
Алтмышыма ингән үҙем бар,
Әлегәсә әйтмәҫ түҙем бар;
Мәле етте, әйтер һүҙем бар.
**Тәү һүҙ:** бер ҡул кеүек берҙәмлек;
Бар өлкәлә бергә үрҙәмлек,
Телдә - берлек ҡатар төрләмле,
Ситләм сапмай, ергә ерләмлек,
Сүпле ерҙә ипле биҙәмлек,
Бер-беребеҙҙән терһәк һиҙәмлек.
Быуын-быуат беҙҙә айырмаһын,
Өйөрмәләр ҡанат ҡайырмаһын,
Атай-олатай - бер теҙәмлек.
Күсәгилеште юҡ өҙәмлек.
Ауыр саҡта бергә түҙәмлек,
Беҙ ирҙәргә кәрәк берҙәмлек;
Беҙгә бағып ҡыҙҙар айҡалһындар,
Ҡыҙҙар ине кисәкәйҙәр,
Бөгөн - бәхет-бисәкәйҙәр
Быуыны бөтөп сайҡалһындар,
Тора-тора таң ҡалһындар:
"Һай, иремдә бар, ай, ирҙәмлек!"
**Икенсеһе:** беҙ Рәсәй үҙәгендә
Илдең нефть типкән йөрәгендә,
Газ-химия-ҡором терәгендә,
Семәр-семәр артерия үтә,
Илем шунан инвалюта кертә,
Беҙҙең быуын тәндә ағыу йөрөтә...
Ә бит Урал Атлантида хәтле,
Саф кислород бирә, шундай йәпле,
Бер-берегеҙгә бәлә ябышҡансы,
Бер-берегеҙгә йәрлек тағышҡансы,
Тыныс, тырыш донъя сафлайыҡ -
Урал тигән уртаҡ йәнебеҙҙе,
Мөхәббәтле һөйгән тәнебеҙҙе,
Аһ, итеп тә туймаҫ йәребеҙҙе
Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлайыҡ!
Тәбиғәтте тибә ҡаҡмайыҡ!
Ҡулдан килгән тикле һәр урында,
Һәр ҡалҡыуҙа, сауҡа, йырында,
Ир-ат егеп, тоҙлап тат-тир түгеп,
Көстә, хисте теҙеп,
Ҡушар тегеп,
Хозурлығын ерҙең һаҡлайыҡ -
Кеше икәнлекте аҡлайыҡ!
**Өсөнсөһө:** әйтер һүҙем шулдыр:
Ат быуаты - егерме биш йылдыр,
Әҙәм быуаты ҙур - өслөтә,
Тик эш башлар кәрәк йәшләтә,
Һун, һун, туктар кәрәк бишләтә.
Тик тапаныу телде тешләтә,
Бейөне айғыр итеп кешнәтә,
Башҡорт быуаты - үр үрләтә.
Егерме лә йәнә берләтә,
Егерме бер тапҡыр етмеш алты -
Мең алты йөҙ (дүрт быуат арты),
Үткәс-киткәс күсенгән гел халҡым,
Хатта таралышҡан талҡым-талҡым...
Әммә бөтөнләгән бирмәгән,
Кәмһенмәгән, күкрәк кирмәгән -
Теләһәң һин һана йомаса,
Теләһәң һин һана румаса -
Кәмей-арта килеш ҡыуатта...
Туғыҙ йөҙ ҙә алтмыш быуатта
Исән ҡалған.
Исән ҡалыр ул,
Телен биреп ике миллә ткә,
Ан һыҙатын тәү буй елләткән,
Үрләм халыҡтарҙы үрләткән,
Йөрләм халыҡтарҙы йөрләткән,
Аймаҡ-ара үҙен берләткән,
Буләренән Ҡолаҡ ҡаҡһа ла,
Биләренән Болаҡ аҡһа ла,
Сүбидәйҙен йотҡан ун төмәнен,
Дүрт Иҙелдә батырып дүрт дүнәнен,
Һаҡлаған ул башҡорт толпарын,
Һаҡлаған ул йөккә йөк парын.
Бисмилланы белгән - уҡымаған
Бер эшкә лә һуңғы әкбарын...
Егерменсе ауыр йөҙ йылғаса
Үҙаң һыҙат тигән йөк барын
Онотмаған йола тәкрарын.
Онотма, һин, йомош-юланын,
Онотма, һин, "Йософ-Зөләйха"ның
Ҡол-Ғәлисә бөйөк миҡдарын.
Таш зинданды тишеп сыға алған,
Өтөп сыға алған ут барын,
Онотма, һин, "Ҡырҡ бер"ҙә түгел,
"Егерме бер" тигән йөт барын.
**Дүртенсеһе:** дүрт яҡ ҡибла булһын,
Ата-әсәндең һөйөге убала булһын,
Таңрәсә һин - ҡушҡул, ҡушаяҡ;
Аш-еҫ бөркөп торһон ҡашыяҡ!
Атаң-әсәң аш-һыу өйрәткәнсә,
Төтөн-һуған менән көйрәткәнсә,
Татлы булһын татыр ризығың,
Аҙҙай булһын ашар аҙығың,
Рәсса булһын яҙған яҙығың,
Үҙеңдеке булһын -
Үҙеңдеке!
Баш өҫтөндә торор ҡаҙығың!
**Бишенсеһе:** һин биш бармағың кеүек
Биш бишекләр туған-затыңды -
Төпкә тибәр ете атыңды,
Ҡутәрә бел ата-атыңды.
Аймағыңды айыра бел, онотма һин:
Аймағыңда һинең ҡаймағың.
Сарсағанда сүлдән йотом кәтмә -
Айран менән кәтәр аймағың.
Аймаҡ һайын ете ырыу булыр,
Ырыу һайын ете йорт булыр,
Йортта ете ауыл, ете сауыл,
Ете бүре, ете ҡорт булыр.
Ауылдарҙа ҡышлаҡ - аралар,
Йәйләүҙәргә үҙгә баралар,
Башҡорт халҡы ете аймаҡ булыр,
Әйле - шуның тора ырыуы,
Ҡәнәш башын ҡора ырыуы.
Ете ырыуҙың әсҡә аймағы,
Аймаҡтағы башҡа ырыуҙарға
Ҡош таратыр үргә һайлағы.
**Алтынсыһы:** һин атың онотма,
Хужа тигән затың онотма.
Ялҡаулыҡ ул - ятың, онотма,
Хужа кеше ойоп йөрөмә,
Һүлпәнлекте тойоп йөрөмә.
Теремек бул, һәр ташланған әйбер -
Кемдәрҙендер хеҙмәтенә ҡәбер;
Алыш-биреш, аҡса әйләнеш -
Был үҫеш ул, тормош яйланыш.
Аҡсаны бит, егет, ир таба,
Терһәк-терһәк йәшәр мир таба.
Һандыҡтарҙа һары аҡсалар
Мәңге хәстә-сиргә оҡшаған,
Хәстәхананан һис сығалмаған
Хәрәкәтһеҙ ятҡан ир кеүек
Тик ятҡан һум яман сир кеүек.
Янынан-яныларын эшләп ал;
Һаран булма: кей һәм тешләп ал!
Кеймәҫ, һөймәҫ,эсмәҫ, тешләмәҫ,
Серем итеп бөтмәҫ, эшләмәҫ
Бар әле, бар беҙҙең арала;
Һарыҡ кеүек хырлай ҡурала.
**Етенсе:** һин етем бәрәстән дә
Ете көтөү аһар егет бул.
Телдән былай ҡылған эшең менән
Артҡа ҡалғандарға өгөт бул.
Үрләт илдең дәртле улдарын,
Көҙгөләй ит барыр юлдарын.
Онотторман йүнле йолаларын;
Яңы эшкә һүҙып ҡулдарын,
Һыҙған, һыҙғандыр ҡуш еңдәрен,
Күтәрһендәр быуат индәрен.
Тупла ерҙән уныш тиңдәрен -
Урал тупрағына тиңдәрен!

1981.

### Яратам үлеп

Мин - гүйә, кейәү егетмен,
Ә күк йөҙә - шаршау.
Донъя - минең һылыу ҡыҙым,
Юҡ һис бер ҡаушау.
Бит күк йөҙә - шаршау!
Теләгәнсә яратамын,
Яратам үлеп,
Донъяның билен өҙәрҙәй
Хәләмә килеп,
Яратам үлеп!
Донъя ҡосағында иртән
Уянам көләп -
Донъяның нәфис тәненең
Ҡәҙерен белеп,
Уянам көләп!
Мин - гүйә, кейәү егетмен,
Ә күк йөҙә - шаршау...
Ярат ҡас, яратыр кәрәк,
Нимәгә ҡаушау!
Бит күк йөҙә - шаршау.
Тик шаршауым - Әфләтунса,
Ҡыҙ ҙа - тик уйҙа...
Эймәйем баш, шул көйө лә
Мин - гүйә, туйҙа!

**РЕДАКЦИЯНАН: Алдағы һандарҙа Рәшит Әхтәриҙең яҙмалары, ғилми мәҡәләләре менән уҡыусыларыбыҙҙы мотлаҡ таныштырасаҡбыҙ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠТЫЛЫҠ КӘМЕЙ...

## яуызлыҡ арта

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер көн профессор студенттарынан былай тип һораған: "Был донъялағы бөтөн нәмәне Аллаһы Тәғәлә яралтканмы?" "Әлбиттә, бөтөн нәмәне Аллаһ барлыҡҡа килтергән", - тип ышанысла яуап биргән бер талип. "Ысынлап та шулаймы?" - тип ныҡышҡан оло уҡытыусы. "Эйе, профессор", - тип ҡабатлаған йәш кеше. Профессор һорауын аныҡлауҙы кәрәк тапкан: "Әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә бөтә нәмәне яралтҡас, был донъялағы яуызлыкты ла Ул яралтҡан булып сыға бит. Тимәк, Аллаһ яуызлыҡ сығанағы?"**

**Студент шымып ҡалған. Быны күргән профессор үҙ һорауынан ҡәнәғәт булып, фекерен дауам иткән: "Бына, күрҙегеҙме, Алланың кешеләр уйлап тапкан миф икәнен мин һеҙгә тағы бер тапҡыр иҫбат иттем".**

**Шул мәл: "Профессор, һорау бирергә мөмкинме?" - тип, икенсе бер талип ҡул күтәргән. "Рәхим ит". "Профессор, һыуыҡ бармы ул?" - тип һораған студент. "Урынһыҙ һорау. Әлбиттә, бар. Һин һыуыкты тоймайһыңмы әллә?"**

**Шымып ҡалған студенттар, юҡтан мәрәкә табып, гөрләшеп көлөшә башлаған. "Профессор, һыуыҡ юҡ, - тип, үҙ һорауына үҙе яуап биргән студент. - Физика закондарына ярашлы, беҙ һыуыҡ тип күнеккән төшөнсә, ысынында, йылылыҡ булмауы ғына. Абсолют ноль Фаренгейт буйынса минус 460 градусты тәшкил итә. Был температурала бөтөн материя хәрәкәттән туктай. Ысынында һыуыҡ юҡ, ул йылылыҡ булмағандағы торошто аңлатыу өсөн уйлап табылған һүҙ генә. Был - бер, ә ҡараңғылыҡ бармы?" "Әлбиттә, бар", - тигән профессор.**

**"Һеҙ тағы ла яңылышаһығыҙ, ҡараңғылыҡ та юҡ. Ул бары тик яҡтылыҡтың булмауы ғына. Беҙ яҡтылыҡ миҡдарын үлсәй алабыҙ, ә ҡараңғылыҡты үлсәп булмай. Ньютон призмаһы ярҙамында, нурҙы төрлө тоҫҡа тарҡатып, һәр төҫтөң тулҡындар оҙонлоғон үлсәй алабыҙ, ә ҡараңғылыҡты улай үлсәп булмай. Саҡ ҡына яҡтылыҡ сатҡыһы ла ҡараңғылыҡты юҡҡа сығара. Был осраҡта күпме ҡараңғылыҡ юҡҡа сыҡҡанын билдәләй алаһығыҙмы? Ҡараңғылыҡ - ул яҡтылыҡ булмағандағы торошто билдәләүсе төшөнсә генә. Профессор, ә яуызлыҡ бармы?"**

**Был юлы профессор ышанысһыҙыраҡ яуап бирә: "Бар. Беҙ уны көн дә күрәбеҙ. Кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата тупаҫ мөғәмәләһе арта бара, енәйәтселек бар донъяны баҫып алған. Яуызлыҡҡа миҫалдарҙы бик күп килтерергә була".**

**Студент һүҙен былай тип тамамлаған: "Яуызлыҡ та юҡ. Ул бары тик Аллаһы Тәғәләгә ышанмау ғына. Ҡараңғылыҡ менән һыуыҡ кеүек, яуызлыҡ төшөнсәһе лә Аллаһ юҡлығын аңлатырға маташып уйлап табылған төшөнсә. Яуызлыкты Аллаһы Тәғәлә яралтмаған, уны әҙәм балалары үҙҙәре уйлап тапҡан. Кеше күңелендә Илаһи һөйөү тойғоһо һүнә барған һайын, унда яуызлыҡ оялай. Яуызлыҡ та, ҡараңғылыҡ кеүек, яҡтылыҡ кәмегән һайын көсәйә бара..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 6206
Заказ 292